*Бер үк ваҡытта әфәнде лә, ҡол да булып булмай. Ҡол булғың килһә, кешеләрҙең һәр береһенә ялағайлан һәм ярарға тырыш, әфәнде булғың килһә инде, үҙеңдә ошо ҡылыҡтарҙан азат ит.*

*(Эпиктет).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7 - 13 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru 2002 йылдан башлап сыға Һатыуҙа хаҡы ирекле №32 (398)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Һыуҙан ҡала, уттан ҡалмай...**

Бөгөн Рәсәйҙең 14 төбәгендә ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуҙы



4

**Уҡытып тәрбиәләйекме,**



8-9 әллә тәрбиәләп уҡытайыҡмы?

**Маҡсатыңа өлгәшеү өсөн...**

уға ҡаршы бар!



12

**Тәмәке харап итте -**

һуңғы һүҙҙәрең ошо булмаһын өсөн...



13

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Берәү дошманын ҡарғап: "Үҙгәртеп ҡороу заманында йәшә!" - тигән. Нимәһе менән насар ул заман? Ошо күҙлектән беҙҙең республикала барған үҙгәрештәргә ниндәй баһа бирәһегеҙ?

*Хәлил БАРЛЫБАЕВ, иҡтисад фәндәре докторы, Рәсәй Федерацияһы Президенты эргәһендәге Дәүләт хеҙмәте академияһы профессоры:*

Һуңғы 20 йыл эсендә беҙҙең республикала төрлө өлкәлә уңыштар ҙа, хаталар ҙа етерлек булды. Мәҙәниәт үҫте үҫеүгә, әммә Сөләймән Абдуллин, Абдулла Солтанов, Рамаҙан Йәнбәков, Нажиә Аллаярова, Фәриҙә Ҡудашева кеүек йырсылар үҫеп сыҡманы, унын ҡарауы, "мыймылдаҡ" йырсылар эт тубығынан. Ләйлә Исмәғилева, Айрат Ҡобағошов, Салауат Низаметдинов кеүек классик музыка яҙыусы композиторҙар бик аҙ, театр сәхнәһендә Арыҫлан Мөбәрәков, Хөсәйен Ҡудашев кеүек шәхестәрҙе алыштырырлыҡ һындар тойолмай. Ҡыҫҡаһы, һәр бер үҫештең мөһим күрһәткесе булған мәҙәниәт, сәнғәт өлкәһендә эпохаль үҫеш күҙәтелмәне. Шуға күрә әлеге үҙгәрештәр уңыштарға өлгәшеүҙе дауам итеүгә һәм хаталарҙы бөтөрөүгә алып килһә, ыңғай булыр, тип уйлайым. Һәр хәлдә, ошоға өмөтләнәм. Ә төптән уйлап ҡарағанда, барыһы ла халыҡтың үҙенән торасаҡ.

*Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ, шағир, журналист:*

Ҡытайҙар был һүҙҙәрҙе ҡарғыш рәүешендә әйткән. Ни өсөн тигәндә, кеше үҙ тәбиғәте буйынса барыбер ҙә консерватор. Ул революцияға түгел, эволюцияға ҡулайлашҡан. Шулай булғас, кинәт үҙгәрештәр уға һәр саҡ насар тәьҫир итә. Быйыл йәмғиәттә генә түгел, тәбиғәттә лә бара бындай үҙгәрештәр. Температура 30-35 градустан аша башлағайны, бөтә Рәсәй яна башланы. Әлбиттә, урман-тауҙарҙың яныуы кеше психикаһына ла тәьҫир итмәй ҡалмай.

Үткән быуаттың 80-се йылдарында илебеҙҙә бөйөк үҙгәрештәр барған саҡта ошондай шиғыр юлдары яҙғайным:

*Тик шуныһы, көтөү боролғанда*
*Алға сыға малдың аҡһағы...*

Был һәр замандағы үҙгәрештәргә хас күренештәр. Әле килеп, беҙҙең республикала власть алмашынып та өлгөрмәне, "аҡһаҡтар" элекке режимды тәнҡитләргә тотондо.

*Әхтәр БОҪҠОНОВ, БДУ-ның юридик колледж директоры:*

Дамирҙың һүҙен дауам итеп, хатта хайуандарҙың бер-береһенә ҡарата аяулы булыуы хаҡында әйтке килә. Хатта бүре бүрене, арыҫлан арыҫланды ашамай. Ә кеше бөйөклөккә лә, бер-береһен ашар сиккә еткән түбәнлеккә лә һәләтле. Ә үҙгәреш заманына килгәндә, ата-әсәне, тыуған ерҙе һайлап булмаған кеүек, заманды ла һайлап булмай. Шуға күрә ундағы үҙгәрештәрҙе лә лайыҡлы үткәреү зарур. Заманда һынылыш булһа ла, кеше һынырға тейеш түгел.

*Марат ТУЛЫБАЕВ, хеҙмәткәр:*

Республика власындағы үҙгәрештәр тәбиғәттең көйһөҙ үҙгәрештәре менән тап килде. Тәүгеһенән төрлө вазифаларҙағы кешеләр баҙап ҡалһа, икенсеһенән - эҫелек, ҡоролоҡтан бар халыҡ яфалана. Ҡулдарҙан эш төштө. Барыһы ла көтә. Вазифалылар эштән ебәрәләрме, юҡмы, тип көтә, халыҡ "Ямғыр яуһын да, ер дымға туйынһын ине", тип хыяллана. Тормош туҡтап ҡалған, тиерһең... Баяғы мәҡәлдең асылы тап ошондай үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән торғонлоҡ, сараһыҙлыҡ, күңел төшөнкөлөгөнә ишаралай торғандыр. Барыһы ла үтә: президенттар килер ҙә китер, дауылдар ҙа, ҡоролоҡ та үтер. Әммә кеше теләһә ниндәй хәлдәрҙә лә аҡылдан яҙмаһын, йәшәү көсөн һаҡлаһын, һәр ауырлыҡты Хоҙай ебәргән һынау итеп ҡабул итергә өйрәнһен ине. Шул уҡ ваҡытта үҙеңдең принциптарыңдан да ситләшмәҫкә, үҙгәрештәргә яраҡлашам, тип, тәбиғәтеңдә булмаған сифаттар уйлап сығарырға ла ярамай.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "Живой журнал" (Livejournal.com) биттәрендә үҙенең блогын булдырҙы. Адресы: "Рөстәм Хәмитовтың блогы" http://community.livejournal.com/blog-rkhamitov. Блог республика халҡы менән аралашыу, мөһим мәсьәләләр һәм проблемалар буйынса диалог режимында һөйләшеү, уй-фекерҙәр, идеялар менән уртаҡлашыу маҡсатында ойошторолдо. Һәр хәлдә, беҙҙең гәзит уҡыусылар ҙа блогҡа инеп, үҙҙәрен борсоған һорауҙарын, теләк-кәңәштәрен, төрлө борсолоу-тәкдимдәрен Президентҡа еткерә ала. Блогта башҡортса ла аралашырға мөмкин.**

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ



*Егеттәрҙең һеҙгә әйтер һүҙҙәре бер кәлимә: "һеҙһеҙ беҙгә йәшәүҙәр юҡ, Зөлхизәкәй, Әминә..."*

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА*

# ЭҪЕНӘН ҺАҠЛАНЫУ ӨСӨН...

## ҡарбуз аша, һөт эс

**Эҫенән һәм төтөндән һаҡланыу өсөн ҡағиҙәләр:**

■ Бөгөн иң ҙур проблема - һыуһау тип әйтһәк тә була. Эҫелек ҡан әйләнешенә зыян итмәһен, тиһәгеҙ, күберәк шыйыҡлыҡ, ә иң яҡшыһы - ябай һыу һәм газһыҙ минераль һыуҙар (дауалаусы һыуҙарҙа тоҙҙар күп була, ә был бөйөр эшмәкәрлеген көсәйтә) эсегеҙ. Ләкин һыуҙы ихтыяж тыуған осраҡта ғына эсергә кәрәк, сөнки артыҡ күп һыу организмдан калий менән магнийҙы сығара, ә был йөрәк эшмәкәрлеген насарайта, хатта тартышыуға ла килтереүе мөмкин. Йөрәк сирлеләргә һәм шешенеүселәргә һыуҙы һаҡлыҡ менән ҡулланырға кәңәш ителә.

■ Тын алыуҙы яҡшыртыр өсөн бөтнөк, цитрус, йылан тамырҙың эфирлы майҙары файҙалы. Янығыҙҙа һәр ваҡыт бәләкәй шешәлә нашатыр йөрөтөгөҙ. Кәрәк булыуы ихтимал!

■ Мөмкин булған тиклем физик көсөргәнешлекте кәметергә тырышығыҙ - ауыр сумкалар һөйрәп йөрөмәгеҙ, физик эш менән шөғөлләнмәгеҙ.

■ Өйҙө, бүлмәгеҙҙе һәр ваҡыт дымландырып тороғоҙ.

■ Бүлмәлә кондиционер булһа ла, һауа барыбер тотҡарлана, ә кондиционерҙа, билдәле булыуынса, бактериялар йыйыла. Шуға күрә өйҙө йыш-йыш елләтеп тороу кәрәк, был бигерәк тә йоҡлар алдынан мөһим.

■ Йөрәгегеҙ менән проблема бар, йәки ҡурылдай (бронх) астмаһы менән яфаланаһығыҙ икән, өйҙән сығыр алдынан дарыуҙарығыҙҙы онотмағыҙ (өйәнәк ҡуҙғала ҡалһа, кәрәк буласаҡ).

■ Ауыр аҙыҡ йөрәккә һәм тын алыу ағзаларына өҫтәмә көсөргәнеш бирә. Майҙарҙы һирәк ашағыҙ, ә антиоксиданттарға бай аҙыҡтарҙы: диңгеҙ балығы, йәшелсә, бигерәк тә япраҡлы салаттар, шпинат, ҡуҙғалаҡ күберәк ашағыҙ. Улар матдәләр алмашыныуын яҡшырта һәм ҡанды таҙарта.

■ Һөт эсегеҙ - ул элек-электән радиацияны һәм һөрөм газын нейтралләштереүсе яҡшы сорбент булараҡ билдәле. Ҡарбуз ашағыҙ - унда шлактарҙы, шулай уҡ ауыр металлы ҡурҡыныс тоҙҙарҙы сығарырға ярҙам итеүсе аминокислоталар һәм минералдар күп.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Баҡтиһәң, был ҡыҙыу эҫенең дә файҙалы яҡтары бар икән. Ҡояш нуры иммунитетты нығытыуға, эндокрин системаһын әүҙемләштерергә, гормондар секрецияһын арттырырға һәләтле. Уның тәьҫире аҫтында ҡан тамырын киңәйтеүсе матдәләр барлыҡҡа килә, ә D витамины һөйәк-мускул системаһын нығыта. Тағы ла бер өҫтөнлөгө: һимеҙлектән ҡотолорға теләүселәр, ниһайәт, быны эшләй ала.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ФАЖИҒӘЛЕР...

## иленә бер файҙа ла килтермәй йәшәү

**Бына әле Иҙел Ғарифуллиндың "Түмән өлкәһе башҡорттары" тип аталған мәҡәләһен уҡып сыҡтым ("Ватандаш", №2, 2010). Башҡортостандан Себерҙе үҙләштерергә киткән юғары квалификациялы кешеләрҙең иҫәбе 2002 йылда 46 мең 575 йөҙгә еткән икән. Түмәндән ҡала Ханты-Мансиҙа, Когалымда, Ямал-Ненец республикаһында, Уренгойҙағы башҡорттарҙың иҫәбе сәсемде үрә торғоҙҙо. Халыҡтарҙың бөйөк күсенеүеме был, тинем мин.**

Минең әхирәтем Фәриҙә лә ире менән 3 йыл Себер яҡтарында "алтын ҡомо йыуыусы" булып эшләп алды. Тик машина, гараж алырлыҡ аҡса туплағас, ҡайтты улар. Бик күптәр аҡса соҡоронан сыға алмай, ҡартайғансы йәшәй, шунда үлә, тип һөйләгәне иҫтә.

Көнсығыш халҡының бер әкиәте күҙ алдыма килә. "Алтын тояҡлы болан" тип атала ул. Уҡығанығыҙ барҙыр (Әкиәттәрҙе яратам мин, сөнки уларҙа быуындан-быуынға һөйләнелеп, камиллашып тапшырыла килгән халыҡ аҡылы тупланған бит). Бер хан боландан алтын тәңкәләр һорай. "Ә күпме кәрәк һуң?" - тигән һорауға: "Бик күп кәрәк!" - ти. Болан ҡомһоҙ ханға: "Ярай, алтын тәңкәләрҙе һин "Етте!" тип әйткәнсе бирермен, тик һин "Етте!" тип әйтһәң, ул тәңкәләр ҡаты балсыҡҡа әүерелер", - тип иҫкәрткән. Хан һуңғы һүҙҙәргә иғтибар ҙа итмәй, боланды ашыҡтыра һала. Болан һипкән алтын тәңкәләр тау-тау булып өйөлә. Хан был ҡалҡыулыҡҡа абынып йығылһа ла: "Тағы-тағы!" - тип ҡысҡырыуын дауам итә. Алтын тәңкәләр уны күмеп китеп, тонсоға башлауын тойған хан: "Етте!" - тип ысҡындыра ла ҡаты балсыҡ аҫтында күмелеп үлеп ҡала.

Үҙ илен ташлап китеп, илен онотоп, ғүмерҙәрен тик байлыҡ туплауға арнағандар уҡыһын ине, тип яҙҙым был әкиәтте. Тыуған иленә бер файҙа ла килтермәй, тик етеш йәшәүгә, үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртыуға арналған ғүмер фажиғәләр, тием.

# ЙӘ ҠАРА, ЙӘ АҠ ЕҢӘ...

## көрәш дауам итә

**Әхмәр Үтәбайҙың "Аҡ сабаҡҡай кеүек килеп ҡаптым" (№26, 2010) мәҡәләһен уҡып, тетрәнеп, бик оҙаҡ уйланып йөрөнөм. Был мәҡәләлә яҙылған ҡурҡыныс ваҡиға үҙенең ысынбарлыҡ булыуы менән йәнде әрнетә.**

Телевизор аша ҡурҡыныс фильмдарҙы көн дә ҡарайбыҙ, тик уларҙың уйҙырма, шаштырыу һәм кино ғына икәнен белеү тынысландыра. Ә ысынбарлыҡ булған документаль хәл-ваҡиғалар тәрән уйға батыра. Халҡыбыҙҙың бер ҡатлылығы, насар уйҙың башына инеп тә сыҡмай, кешегә ышанып барыуы саф тәбиғәт балаһы булып ҡалыуынан киләлер. Тарихта Алдар батырҙың "һөйләшербеҙ, аңлашырбыҙ" тип, үҙе үк барып, ҡулға алынып, язалап үлтерелеүе башҡа һыймаҫлыҡ фажиғә бит. Ә Ҡаһым түрәнең французлдарҙы еңеү тантанаһына арнап эскән эсемлегенең ағыулы булыуы, ерҙәребеҙҙе талағанда: "Кем ерен һатырға теләмәй, шул ошо ҡағыҙға ҡултамғаһын ҡуя", - тип алдап, ҡултамғалар йыйып, һуңынан ҡағыҙҙың өҫкө өлөшөнә "Һатырға ризабыҙ" тигән һүҙҙе өҫтәп яҙыуҙары... Төптәнерәк фекер йөрөтһәң, тарихты уҡып, уйланып, уйылып китерлек бит. Бәлки, Аллабыҙ, әҙәм заты тотош башҡорт кеүек саф, эскерһеҙ булһын, тип кешелек донъяһын бар иткәндер. Яуызлыҡ ер йөҙөн күмеп барғандай тойола. Беҙгә үҙгәрергәме?

Әхмәр Үтәбайҙың мәҡәләһен кемгә генә һөйләмәйем: "Был ахырызаман яҡынлашыуылыр", - тип кенә көрһөнөп ҡуялар. Аллаһы Тәғәлә ете көн эсендә ерҙә кешелек йәшәрлек мөмкинлек тыуҙырған, имеш. Ә Әҙәмде, ашығып, ниндәй балсыҡ тура килә, шунан әүәләп, йән өргән, имеш. Берәү әйтмешләй, бына шуға ла кеше заты нисәмә быуат буйы камиллыҡҡа ынтыла. Йә ҡара, йә аҡ еңә. Көрәш дауам итә. Тарихты һәйбәт үҙләштереү, үткәндәрҙән фәһем алып йәшәү ҡотҡарыр беҙҙе, тип, фекер туплап ҡуйҙым әле...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШЕБЕҘ!



Баҡалы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

***2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итәбеҙ.***

***Һеҙ август аҙағына тиклем 2010 йылғы хаҡтар менән 2011 йылдың тәүге ярты йыллығына яҙыла алаһығыҙ. Ашығығыҙ!***

***Индекстарыбыҙ: 50665 (318 һум 24 тин), 50673 (354 һум 24 тин).***

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Сибайҙа һәм Дыуан районында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың йәмәғәт ҡабул итеү бүлмәләре эшләй башланы. Улар республика дәүләт власы органдарының граждандлыҡ йәмғиәте институттары һәм халыҡ менән үҙ-ара һөҙөмтәле эш итеүе өсөн асылды. Бындай бүлмәләр граждандарҙың власть структуралары менән аралашыуын еңеләйтәсәк.

✓7 августан Башҡортостанда "Донорҙар шәмбеһе" Бөтә Рәсәй акцияһы башлана. Теләге булғандар Өфөлә урынлашҡан Республика ҡан биреү станцияһында (Батыр урамы, 41/1-се йорт) иртәнге сәғәт 8-ҙән төшкө сәғәт 1-гә тиклем ҡан тапшыра ала.

✓"Таҙа ҡулдар" йәмәғәт ойошмаһына килгән ялыуҙар буйынса Рәсәйҙең коррупцияға ныҡ бирелгән төбәктәре билдәләнгән. Беренсе урында - Мәскәү, өсөнсө урында Татарстан тора. Башҡортостан илдең коррупция һаҙлығына батҡан ун төбәге исемлегендә.

✓Август башынан донъяның 120-ләп илендә күкрәк һөтө имеҙеүҙе яҡлау аҙналығы башланды. Акция сиктәрендә Башҡортостанда ла төрлө саралар үтәсәк. Белгестәр билдәләүенсә, күкрәк һөтө имеҙеү- бала туҡланыуының алтын стандарты. Был йәһәттән республикала аңлатыу эштәре киң йәйелдерелгән. Бөгөн республиканың өс тиҫтәнән ашыу дауалау учреждениеһы "Балаға мәрхәмәтле дауахана" статусына эйә.

✓Башҡортостанда иң хәүефле юлдар билдәләнгән. Улар: Мәскәү - Өфө: Саҡмағош бололошо эргәһендә, Исәмәт һәм Ишҡар ауылдары янында; Һамар - Өфө - Силәбе; Туймазы ҡалаһы бололошо, Әлкә, Жуков юл үткәрегесендә, Бишҡурай һәм Зинин - Жилин ауылдары янындағы юл сатында; Өфө- Ырымбур: Ҡырмыҫҡалы юл үткәргесе янында, Стәрлебаш бололошо, Федоровканан, Талбазы һәм Ергән ауылдарынан сыҡҡан ерҙә; Өфөлә Октябрь проспекты, Менделеев, СССР-ҙың 50 йыллығы, Жуков, Цюрупа, Сельская Богородская һәм Комсомол урамдары - былар барыһы ла аварияләр күп булған юлдар иҫәбендә.

✓Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығының иҡтисади программалар һәм йәштәрҙе эш менән тәьмин итеү бүлеге белгестәре һәр шаршамбы көндөҙгө сәғәт 2-нән 6-ға тиклем торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж йәш ғаиләләр өсөн консультациялар ойоштора. Һорауҙар буйынса тел. : (347) 251-57-23.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Көндәлек матбуғат баҫмаларын уҡып, телевизор артына ултырһаң, йәшәүе ҡурҡыныс була барған һымаҡ тойола башлай - шуны һиҙәһегеҙме икән? Ҡайҙа ҡарама, ҡоралды бандалар йә инкассаторҙарға, йә милиция органдарына һөжүм итә; милиция вәкиле үҙе кемделер туҡмай, әлләү үлтерә; наркотиктар менән сауҙа гөрләй; ҡайҙалыр янғындан тотош ауылдар юҡҡа сыҡҡан, тегендә лә, бында ла урман яна...**

# ХАҠЛЫ ЯЛДАҒЫ ЭШЛӘҺӘ...

## Пенсияһы арта барыр



"Комсомольская правда"ның сираттағы һандарының береһендә беренсе биттәге эре итеп яҙылған "Рәсәй ут эсендә" тигән һүҙҙәрҙе күргәс, тәндәр зымбырҙап китте. Әйлән-тирәлә - ут, яныу, көйөү. Ҡояшы ла ялҡын сәсеүҙән туктарға уйламай, ахырыһы, эҫелек 40 градусҡа тиклем барып етте. Ни гиллә был? Ҡайһы берәүҙәр, етмәһә, ахырызамандың башланып тороуы ошо булыр, тип ҡотто ала. Булһа, булыр ҙа - самаһыҙ шашты бит кешелек донъяһы. Әҙәмдә сама тойғоһо, әхлаҡ-әҙәп ҡанундары, кешелеклелек, кеселеклелек сифаттары күҙ алдында юҡҡа сыға бара. Бындай кәйеф, ихтимал, үтә субъектив хис-тойғонан да килеп тыуғандыр. Үҙәк матбуғат саралары ла төймәне дөйә итеп күрһәтеү оҫталығына эйә булып алды бит хәҙер.

Ошондай шарттарҙа батып барыусыға һалам булырҙай ҡош телендәй генә изге хәбәр ишетке килә. Ошо селләнән көйөп барғанда, бер уртлам саф, һалҡын һыу һымаҡ кәрәк хәҙер бындай һүҙ.

Шөкөр, яҡшы хәбәрҙәр ҙә килеп етте беҙгә. Йәштәр был ҡыҙыу көндәрҙә юғары уҡыу йорттарына инешеп, ҡыуанышһа, ҡарт-ҡороға ла яйы сығып тора әле һөйөнөргә. Киләһе йылдан, Рәсәй Премьер-министры В.Путин һүҙҙәренә ҡарағанда, пенсия күләме 9 процентҡа артып, ҡартлыҡ буйынса уртаса пенсия айына 8 мең 780 һумға, ә социаль пенсия 5 мең 50 һум тәшкил итәсәк. Был 1 февралдән булыр, тип көтөлә. Шул уҡ ваҡытта хәрби хеҙмәткәрҙәргә, милиционерҙарға - эш хаҡы, студенттарға стипендия ла артасаҡ.

Ә инде киләһе йылға тиклем көтөргә түҙемлеге етмәгәндәргә әле уҡ шатланырға була: ағымдағы йылдың 1 августынан эшләп йөрөүсе йә булмаһа пенсия тәғәйенләнгәндән алда эшләгән пенсионерҙарға хеҙмәт пенсияһы күләме шулай уҡ арттырыла. Ҡайтанан иҫәпләү хеҙмәт пенсияһы күләмен иҫәпләгәндә һәм уны тәғәйенләгәндә, бер пенсия төрөнән икенсеһенә күскәндә, бынан алда башҡарылған ҡайтанан иҫәпләү һәм төҙәтмәләр индергәндә иҫәпкә алынмаған страховкалау взностары тураһындағы мәғлүмәттәр нигеҙендә эшләнәсәк. Страховкалау взностары эш биреүсе тарафынан тәьмин ителә, пенсия иҫәпләү автоматик режимда пенсионерҙың иҫәп ҡағыҙынан күсермә буйынса ғариза менән мөрәжәғәт итмәйенсә башҡарыла.

Пенсия фондының БР буйынса бүлексәһе матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, беҙҙең республикала 218 меңдән ашыу пенсионер юғары пенсия аласаҡ. Пенсия күләмен арттырыу индивидуаль рәүештә, страховкалау взностары суммаһына ҡарап башҡарыла.

Рәсәй Премьерының тағы ла шул һүҙҙәре күңелгә ятышлы: киләһе йыл бюджет наҡыҫлығын 3,6 процентҡа тиклем кәметеү бурысы ҡуйыла. Дәүләт үҙенең социаль йөкләмәһен һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итәсәк. Быға иҡтисадты модернизациялау һәм юғары технологияларҙы үҫтереү программаларын эшкә ҡушыу нигеҙендә өлгәшеләсәк, тип вәғәҙә итә В.Путин. Эйе, был дөрөҫ йүнәлеш буласаҡ. Югиһә, иң яҡлауһыҙ һәм иң әҙ тәьмин ителгән ҡатламдың - пенсионерҙарҙың тиндәренә күпме ҡаныға мөмкин?

Икенсе яҡтан, был пенсия йәшендәгеләрҙе оҙағыраҡ ваҡыт буйына әүҙем эшкә йәлеп итеүҙең дә отошло алымы буласаҡ. Гәзитебеҙҙең үткән һанында хәбәр ителеүенсә, пенсияға сығыу йәше барыбер оҙайтыласаҡ. Шуға күрә хаҡлы ялдағыларҙы эшкә ҡыҙыҡһындырыу киләсәктә пенсия йәшен оҙайтыу реформаһын "ауыртыныуһыҙ" үткәреп ебәреү өсөн үҙенә күрә репетиция ла ул.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

### ҺӘР МӘҠӘЛӘ УЙЛАНДЫРА

**Гөлназ Әминева, уҡытыусы:** "Киске Өфө"нөң һәр һанын уҡып барам. Башҡа күп гәзиттәрҙәге һымаҡ, ҡоро мәғлүмәт биреү менән генә сикләнмәй был баҫма, ә һәр мәҡәлә уйланырға, анализларға мәжбүр итә. Шулай уҡ, уҡытыусы булараҡ, дәрестәрҙә ҡулланырлыҡ материалдар ҙа урын ала гәзит биттәрендә. Башҡорт халҡына ҡағылған тарихи материалдар, фәһем алырлыҡ төрлө донъяуи мәҡәләләр уҡырға яратам "Киске Өфө"нән.

**Регина Фазлетдинова, Сибай ҡалаһы:** Беҙ элек-электән ҡала һәм республика гәзиттәренә яҙылмай ҡалмайбыҙ. "Киске Өфө"нө тәүге һандарынан алып уҡып барабыҙ. Һәр мәҡәләгә журналистың оҙайлы, ҙур хеҙмәте һалынғаны күренеп тора, еңел-елпе сығыштар бөтөнләй юҡ был баҫмала. Район, ҡалаларҙағы авторҙар ҙа иң актуаль проблемаларҙы күтәреп сыға. Шулай уҡ "Киске Өфө"лә баҫылған әҙәби әҫәрҙәрҙе лә ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ.

**Айгиз Хәлимов, студент:** Был гәзиттә иң яратып уҡығаным - тарихи материалдар. Ундай материалдарҙы китаптарҙа табыуы ауыр. Өҙөктәр теге йәки был китаптан алынһа иһә, артабан ул китапты табып, тиҙерәк уҡып сығырға тырышыла.

**Сәлиә Моратшина, Әбйәлил районы, мәктәп уҡыусыһы:** "Киске Өфө"нән балалар донъяһына ҡағылған мәҡәләләрҙе уҡырға яратам. Ризаитдин Фәхретдиновтың нәсихәттәре бик оҡшай. Һәм төрлө район, ҡалаларҙан йыйылған "Yoka пресс" хәбәрҙәрен дә ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам.

УЙЛАН...

# МАЛЫҢДЫ ҺАТҺАҢ...

## нимәң ҡала?

**Июнь баштарында Хәйбулланан ата-әсәйемдең ғаилә дуҫтары беҙҙең Салауат районына ҡунаҡҡа килеп төштө. Был осорҙа ауыл халҡы нимәгә зарлана? Әлбиттә, ҡоролоҡҡа, мал аҙығы әҙерләү ауырлыҡтарына. Ата-әсәйем дә ошо турала зарлана башлағайны, ҡунаҡ ағай ҡапыл ғына һорап ҡуйҙы: "Малдарығыҙҙың мороно ҡарайып, тупраҡҡа буялып ҡайтамы?" Аптырап, юҡ, тине әсәйҙәр. "Тимәк, һеҙҙә әле ҡоролоҡ түгел, ҡоролоҡ булһа, малдар үләндең тамырын соҡоп ашай, шуға ауыҙ-мороно тупраҡҡа буялып, ҡарайып ҡайта"... тине Хәйбулланан килгән ағай.**

Эйе, ҡоролоҡ ауыл кешеһенең берҙән-бер тиерлек йәшәү сығанағы булған малсылыҡҡа арыу ғына зыян килтерҙе. Бигерәк тә республиканың көньяҡ райондарында малдарҙың мороно ҡарайып, тупраҡҡа буялып ҡайта, тиҙәр. Күптән булғаны юҡ ине был хәлдең. Был көндәрҙә тап ошо төбәктән шундай хәбәр ишеттерҙеләр: ауыл халҡы малдары көр саҡта уларҙы һатып ҡалырға ашыға икән. Хаҡы ла тауыҡ көләрлөк - бер ҡышлауға дүрт мең алалар. Күрше төбәктән килеүсе алыпһатарҙар шуны ғына көтөп тора ла инде. Бушлай тигәндәй алып китә лә, ҡалаларға алып килеп, ҡиммәт хаҡҡа һата.

Республика етәкселеге иһә был мәсьәләне хәл итеүҙең икенсе юлын тәҡдим итә. Хужалыҡтарҙың артыҡ булған мал-тыуарын "Башплемсервис" дәүләт унитар ауыл хужалығы предприятиеһы аша һата. Йәғни малдың тере ауырлығын килограмы 50-55 һум менән һатып алына. Әле ойошма хеҙмәткәрҙәре республиканың тап ҡоролоҡтан зыян күргән көньяҡ районлдарында эшләй. Әлегә яҡынса 5000 баш эре мал менән 1000 баш ат йыйылған. Малдар мал аҙығы етерлек кимәлдә тупланған хужалыҡтарға һатыласаҡ. Улары үҙ сиратында мал хаҡын өс йыл һуҙымында бүлеп түләйәсәк. Шуға ла кем малын һатып, аҡсаһын өс йыл дауамында алырға риза - оператив рәүештә ҡоролоҡтан зыян күреүҙе раҫлаған, ярҙам һорарға нигеҙ биргән документтарҙы йыя башлай ала.

Бынан тыш, хужалыҡтар өсөн дә айырым программалар ҡабул ителәсәк. Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, Хөкүмәт ҡоролоҡ эҙемтәләре буйынса мөһим саралар проекты әҙерләй. Уға ярашлы, ауыл хужалығы тауары етештереүселәргә "Башагропродукт" дәүләт унитар предприятиеһы аша мал аҙығы, орлоҡ, яғыулыҡ-майлау материалдары алыу өсөн заем бирелсәк. Ҡоролоҡтан зыян күргән райондарға финанс ярҙамы күрһәтеләсәк.

...Ә шулай ҙа шәхси хужалыҡтарға, малдарығыҙҙы һаҡларға тырышырға кәрәк, тип көнөү генә ҡала. Мин үҙем күп мал аҫыраған атай-әсәйгә йыш шылтыратам, ҡабат-ҡабат бесән әҙерләй алыу-алмауҙары менән ҡыҙыҡһынам. "Урман тулы бесән, ялҡауың ғына килмәһен, - ти улар. - Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа халыҡ бесәнде трактор менән сабырға өйрәнгәйне, шуға ла ҡулдарына салғы тоторға онотоп баралар. Салғы тотоп урманға барһаң, ағас төптәрендә лә, башҡа урындарҙа ла семтекләп булһа ла сабыр үлән табып була инде ул..." Барып әйләнегеҙ әле шулай ҙа урман тирәләренә, йәмәғәт. Юҡһа, һуңғы малыңдан да яҙһаң, нимәң ҡалыр?

**Зәйтүнә САЛАУАТОВА.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Р.З. Хәмитов 2010 йылдың 4 августындағы УП-449-сы Указы менән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫарҙарын, министрлыҡтар һәм дәүләт комитеттары башлыҡтарын тәғәйенләне. Шулай уҡ биш министрлыҡ үҙгәртеп ҡоролдо һәм бер-нисә дәүләт комитеты барлыҡҡа килде.

✓Физкультурниктар көнөн байрам итеү сиктәрендә 8 августа Өфөлә "Дуҫлыҡ монументы" янындағы спорт майҙансығында пляж волейболы буйынса турнир үтә. Сарала теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар һәм ҡатнаш командалар еңелйәтелгән ҡағиҙәләр буйынса көс һынашасаҡ. Ҡатнашыусыларҙы теркәү - 12.30 сәғәттә, ярыш 13 сәғәттә башланы.

✓"Мәғариф" милли проекты сиктәрендә Башҡортостандан 37 уҡытыусы 200 мең һум күләмендәге федераль грантҡа лайыҡ булған. Грантҡа эйә булыусы уҡытыусылар араһында 6 ир-егет тә бар. БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, төбәк конкурсында 380 кеше ҡатнашҡан. Енеүселәрҙе 40 кешенән торған эксперт комиссияһы билдәләгән. Дүртенсе йыл дауамында тапшырылған был грантты республиканан бөтәһе 1466 уҡытыусы алған. 2010 йылдан был конкурста ҡатнашыусылар һаны кәмегән, әммә грант күләме 200 меңгә тиклем арҡкан.

✓Республикала тыуым һаны быйыл 3,1 процентҡа артһа, үлем һаны 3 процентҡа кәмегән. 2010 йылдың тәүге айы эсендә Башҡортостанда халыҡтың тәбиғи үҫеше 3,5 промилле тәшкил итте. Был осор эсендә транспорт ҡатнашлығында һәм бәхетһеҙ осраҡтан үлеүселәр һаны - 16,8, яман шештән - 11,3, ҡан әйләнеше системаһы сирҙәренән - 16,8, туберкулеҙҙан 2 процентҡа кәмегән. Дөйөм сирҙәр структураһында киң таралған ауырыуҙар булып тын алыу ағзалары (20,6 процент), ҡан әйләнеше (15 процент), аш һеңдереү ағзалары (9,1) тора. ВИЧ-инфекция менән зарарланыусылар артҡан, наркомания, токсикомания, енси юл менән таралған инфекциялар, хроник алкоголизм кәмегән. Холоҡ төҙәтеү урындарында туберкулез менән ауырыусылар һанының артыуы теркәлгән.

✓ *Янғындарҙың төп сығанағы - ут менән һаҡһыҙ эш итеү, һүндерелмәгән тәмәке төпсөктәрен ырғытыу, балаларҙың шырпы менән уйнауы, буш шешәләрҙе ҡояшта ҡалдырыу, ҡоро йәшен.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** 31 августа "Дим" паркында Тимер юлсылар көнөнә арналған байрам саралары үтәсәк. Тантаналы митингыла тармаҡтың иң яҡшы хеҙмәткәрҙәре бүләкләнәсәк. Сарала ғаилә, спорт, балалар майҙансыҡтары эшләйәсәк, сәхнәлә ҙур концерт ҡуйыласаҡ. Ғөмүмән, байрам олоһоноң да, кесеһенең дә күңеленә хуш киләсәк.

**Калинин.** Контр-адмирал М.И. Бакаев исемендәге Өфө ҡала балалар Диңгеҙ үҙәгенең йәш моряктары йыл һайын йәйгеһен күнекмә караптарында һәм бәләкәй судноларҙа практикаға сыға. Быйыл да июнь-июль айҙарында Өфө-Кушнаренко-Өфө, Өфө-Ҡариҙел-Өфө, Өфө-Бөрө-Өфө маршруттары буйлап походтар ойошторолған. 80 егет карап системаларын хеҙмәтләндереүҙә, уның менән идара итеүҙә ҡатнаша, экипаж ағзалары бурысын башҡара. Практика ваҡытында улар Ҡыҙыл Яр ауылында 25-се Чапаев дивизияһының музейында, Благовещендың флотты ремонтлау-эксплуатация базаһында экскурсияла була.

**Орджоникидзе.** Йәйҙең саманан тыш эҫе, ҡоро булыуы ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәрҙең планына бер аҙ үҙгәрештәр индерһә лә, умартасылар балдан юғары уңыш алырға ниәтләй. Август башынан райондың барлыҡ баҙарҙары ла татлы аҙыҡ һатырға теләүселәрҙе ҡабул итергә әҙер. Улар өсөн бушлай урындар бүленгән дә инде. Ай һуҙымында балды баҙарҙарҙа һатып алыу мөмкин булһа, 4 сентябрҙә С.Орджоникидзе исемендәге майҙанда Бал йәрминкәһе үтәсәк.

**Октябрь.** "Дети плюс" балалар, үҫмерҙәр һәм йәштәрҙең берләшкән клубтарының ете үҫмерҙәр клубында көндөҙгө ялдың профилле сменалары ойошторолоп, унда июндә - ике мең, профилле лагерҙарҙа 600-ҙән ашыу бала ял итә. Уларға Салауат, Бөрйән, Туймазы, Ғафури райондарына походтар, йылға буйлап ағыуҙар ойоштороla. Районда шулай уҡ "Йәйғор" һәм "Альбатрос" лагерҙарында балаларға белем биреү-һауыҡтырыу эштәре лә дауам итә.

**Совет.** 21 августа И.Якутов исемендәге паркта "Сәскәләр көнө" байрамы үтә. Сара сиктәрендә "Сәскәләр карнавалы" конкурсын үткәреү ҙә планлаштырыла. Унда предприятиелар, учреждениелар, сәскә үҫтереүселәр клубтары, питомниктар, махсус магазиндар ғына түгел, һәүәҫкәр сәскә үҫтереүселәр ҙә ҡатнаша ала. Еңеүселәр биш номинация буйынса билдәләнәсәк. Заявкалар район хакимиәтенең 102-се бүлмәһендә 14 авгусҡа тиклем ҡабул ителә.

**Ленин.** Районда "Штраф" шартлы атамаһы аҫтында паспортһыҙ йәшәүселәрҙе, йәшәү урынына килеп, теркәү үтмәүсе мигранттарҙы асыҡлаусы профилактик сара уҙғарыла. Билдәләнгән ваҡытҡа штраф түләмәүселәргә икеләтә административ штраф һалына йәки 15 көнгә административ ҡулға алыу ҡаралған. Бөгөн районда ике кеше ҡулға алынған, берәүгә дүрт мең күләмендә штраф һалынған.

**Киров.** 2-се Социаль-профилактика үҙәге белгестәренә йәйгеһен дә эш етерлек. Был осорҙа улар үҫмерҙәрҙе хеҙмәткә ылыҡтыра, теге йәки был профессияға һөйөү тәрбиәләй. Уларҙың ярҙамы менән Өфөнөң 21-се лицейы үҫмерҙәре йәйҙе бушҡа үткәрмәне, яңы уҡыу йылына үҙҙәренә кәрәк-яраҡ алырға аҡса эшләне. Педагогтар белдереүенсә, бындай тәжрибә үҙ һөҙөмтәһен бирә, балаларҙа теүәллек барлыҡҡа килә, улар яңы белемгә ынтыла, бәғзеләр буласаҡ профессияһын да һайлай.

## Аһ-Аһ!

# ҺЫУҘАН ҠАЛА, УТТАН ҠАЛМАЙ...

## Бөгөн Рәсәйҙең 14 төбәгендә ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуҙы

**"Уттың ялы-ҡойроғо юҡ", тип бик дөрөҫ әйткән ата-олатайҙар. Сөнки утты, бер тоҡанһа, туҡтатыуы, һүндереүе бик ауыр. Быйылғы ҡоролоҡ, һауа температураһының саманан тыш эҫе булыуы моңһоҙҙарҙың моңһоҙлоғон ҡарап, аңдып ҡына торғандай.**

Әлеге ваҡытта илебеҙҙең Мордовия, Татарстан республикаларында, Белгород, Воронеж, Иваново, Киров, Мәскәү, Нижегородск, Рязань, Ульяновск, Владимир, Липецк, Тамбов, Тула өлкәләрендә ғәҙәттән тыш янғын хәл-торошо килеп тыуған. Шуларҙың етеһендә Рәсәй Президенты Дмитрий Медведевтың Указы менән ғәҙәттән тыш хәл иғлан ителгән. Атап үтелгән төбәктәрҙә 40 кеше янғында һәләк булған, меңдәрсә кеше йорт-ерһеҙ тороп ҡалған. Липецк өлкәһендә өс сәғәт эсендә 70 йорттоң 50-һе көлкүмергә әйләнгән. Теге йәки был төбәктәге янғынды туҡтатыу өсөн дөйөм алғанда 155 мең 766 кеше һәм 25 мең берәмек техника йәлеп ителгән. Унда Башҡортостандан да ике тиҫтә самаһы янғын һүндереү техникаһы ҡатнаша.

Башҡортостанда йыл башынан алып 422 урман янғыны теркәлгән. Уттан зыян күргән территорияның майҙаны 8 мең гектарҙан ашыу ерҙе тәшкил итә. Күрелгән зыян - 41 миллион һум. Урман янғындарын һүндереү буйынса эш тәүлек әйләнәһенә алып барыла, урман фонды буйынса патруль ойошторолған. Йылдың тәүге яртыһында 9,5 мең самаһы шундай патруль тикшереүе үткәрелеп, 275 осраҡта кешеләрҙең урманда янғындан һаҡланыу сараларын күрмәүе асыҡланған.

Бөгөнгө хәл-тороштоң сәбәпсеһе, урмандарҙың ғына түгел, ғөмүмән, янғындарҙың төп сығанағы - ут менән һаҡһыҙ эш итеү, һүндерелмәгән тәмәке төпсөктәрен ырғытыу, балаларҙың шырпы менән уйнауы, буш шешәләрҙе ҡояшта ҡалдырыу, ҡоро йәшен. Ямғырһыҙ йәшен ҡыҙған объектҡа атыу менән ут тоҡана. Ә ямғыр ваҡытында ут тоҡанмауы ла ихтимал.

Шулай уҡ урмандарҙа хатта бер нисә йыл элек ҡалдырып киткән быяла шешәләр ҙә фажиғәгә килтерә. Ҡыҙыу ҡояш аҫтында ятып, быяла ҡоро үләнде, япраҡты, ҡаҙы, торфты күҙ йомоп асҡан арала яндырып ебәреүе мөмкин. Шуға ла бик һаҡ булырға кәрәк, һаҡланғанды - һаҡлармын, тигән бит Аллаһы Тәғәлә лә.

Бәлә-ҡаза килгәндә халыҡ берҙәм булып ярҙам ҡулы һуҙа. Янғындан ҡаза күргән Рәсәй төбәктәрендә йәшәүселәрҙең фажиғәһен Башҡортостан халҡы ла үҙенекеләй күреп ҡабул итте. Ошо көндәрҙә Өфөлә улар өсөн кейем-һалым йыйыла башланы. Ярҙам ҡулы һуҙырға теләүселәр түбәндәге адрестар буйынса социаль хеҙмәтләндереүҙең комплекслы үҙәктәренә кейем-һалым килтерә ала:

**Дим биҫтәһендә** - Үҙәк урам, 18, тел.: 281-49-69, 281-15-56;

**Калинин районында** - Б.Хмельницкий урамы, 53, тел.: 283-95-22, Вологодская урамы, 34/1, тел.:263-45-67, Олимпия урамы, 47/1, тел.: 267-21-22;

**Киров районында** - Менделеев урамы, 136/2, тел.: 256-55-04, Степан Кувыкин урамы, 14, тел.: 255-99-61;

**Ленин районында** - Ғафури урамы, 103, тел.: 251-04-35, 250-77-00, Суднолар ремонтлау урамы, 27, тел.: 271-14-50;

**Октябрь районында** - Зорге урамы, 31, 282-16-77, 282-55-82, Б. Бикбай урамы, 35/1, тел.:230-69-56, Энтузиастар урамы, 6, тел.: 241-47-99;

**Орджоникидзе районында** - Б. Хмельницкий урамы, 68/1, тел.: 263-33-26, 263-49-26;

**Совет районында** - Цюрупа урамы, 102, тел.: 273-31-47, К. Маркс урамы, 65, тел.: 251-38-88.

**Зәйтүнә ХӘБИРОВА.**



## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә быйылғы тәүге ярты йыллыҡта медицина учреждениелары эше тураһындағы мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, эште яңыса ойоштороу, машиналарҙы юлдаш автомониторинғы системаһы менән йыһазландырыу, шулай уҡ поликлиникаларҙа кисектергеһеҙ ярҙам пункттары ойоштороу арҡаһында "Тиҙ ярҙам" хеҙмәтенең һөҙөмтәлелеге күтәрелгән.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Рәшит Саттаров журналистар менән осрашты һәм уларҙы баш ҡалала алып барылған төҙөлөш эштәре торошо менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, 2010 йылдың тәүге яртыһында Өфөлә 227,4 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән һәм файҙаланыуға тапшырылған, уның 101,4 мең квадрат метры - күп ҡатлы, 126 меңе - шәхси торлаҡ. Июлдә баш ҡалала яҡынса 15 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән.

✓Торлаҡ-коммуналь хужалыҡты реформалауға ярҙам итеү фондынан 135,3 млн. һум аҡса быйылғы алты айҙа социаль объекттар проектлау, төҙөү, реконструкциялау өсөн дә тотонолған. Ленин районында 9-сы спорт мәктәбе территорияһында футбол майҙансығы сафҡа индерелгән. 17-се балалар клиник дауаханаһында капиталь ремонт тамамланған, Киров районының Иртыш урамында яңы балалар баҡсаһы һәм "Ҡашҡаҙан" паркында яңы универсаль спорт майҙансығы төҙөлгән, Максимовка ҡасабаһында мәҙәниәт йорто ремонтланған.

✓2010-2013 йылдарҙа "Затон" районында физкультура-һауыҡтырыу комплексы, "Йүрүҙән" сауҙа үҙәге артында спорт комплексы, "Сипайлово-1", "Сипайлово-5", "Колгуевский" микрорайондарында 4 балалар баҡсаһы төҙөү проекттары ҡарала. "Йүрүҙән" микрорайонында балалар баҡсаһы, "Дим-8", "Колгуевский", "Йүрүҙән" микрорайондарында мәктәп һәм Совет районында яңы мәктәп проектлана башлаған, Дим районындағы 102-се башҡорт гимназияһы бинаһы реконструкциялана. Бынан тыш, 5-се, 8-се, 13-сө, 18-се, 21-се ҡала клиник дауаханаларында, 1-се поликлиникала, 8-се балалар поликлиникаһында, 3-сө дауахананың бала табыу бүлексәһендә ремонт эштәре бара.

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# БЕЛЕМЛЕ КЕШЕ...

## тәрбиәһеҙ була аламы?

?

• **Оптималләштереү һеҙҙең уҡыу учреждениеһының уҡытыу-тәрбиә эшенә нисек йоғонто яһаясаҡ?**

• **Баланың мәктәптә белем алыуымы, әллә тәрбиә алыуы мөһимерәкме?**

→ **Фәнил НУРИЕВ, Республика башҡорт лицей-интернаты директоры:**

• Дөрөҫөн әйткәндә, мин әлегә ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр күрмәйем. Ауыл мәктәптәрен ҡыҫҡарттылар, икенсе уҡыу йорттарына филиал итеп ҡуштылар. Ошо сәбәпле, уҡырға алыуыбыҙҙы һорап ябылған мәктәптәрҙән уҡыусылар килеүен дауам итә. Әммә, ҡыҙғанысҡа күрә, интернатта ла урындар һаны иҫәпле һәм беҙ уларҙың барыһын да ҡабул итә алмайбыҙ.

Хеҙмәт хаҡын түләүҙең яңы системаһын индереү өлкәһендә лә ыңғай күренештәр юҡ, тип иҫәпләйем. Штат ҡыҫҡартылды, фонд вәғәҙә ителгәнсә күтәрелмәне. Күп мәктәптәр түңәрәктәрҙе кәметте, беҙҙең лицейҙа улар элекке килеш ҡалды. Йылдағыса, йәйге лагерҙарҙы ла ойошторорға тырыштыҡ. Талап буйынса түңәрәк эштәрен ҡыҫҡартыусы белем усаҡтары хәҙер яңынан уларҙы булдырыу проблемаһы алдына килеп баҫты, сөнки спорт һ.б. эштәр аҡһай башланы. Шуға ла мәғариф өлкәһен ҡулайлаштырыу һәм экономия яһау мөмкинлеге бик ауыр мәсьәлә булып ҡала бөгөн. Әлбиттә, вәғәҙә ителгән 30 процент фонд бирелһә, түңәрәк эштәрен дә, башҡа белем биреү һәм тәрбиә эштәрен камиллаштырып булыр ине, тик әлегә был тормошҡа ашмаҫ хыял кеүек кенә булып ҡала.

• Был ҡатмарлы һорауға әлегә тиклем берәү ҙә аныҡ ҡына итеп яуап бирә алмағандыр ул. Бер яҡтан ҡараһаҡ, тәрбиә белемгә ҡарағанда мөһимерәк һымаҡ, икенсе яҡтан ҡараһаң, белемле кеше тәрбиәһеҙ булмай һымаҡ. Әммә тәрбиәһеҙ белемле кешене сығарыу насарыраҡтыр, ни өсөн тигәндә, тәрбиәһеҙ, тәртипһеҙ кеше белемле булһа, ул башҡаларға ла, йәмғиәткә лә зыянды күберәк эшләүе ихтимал. Балалар тәүлек әйләнәһенә үҙегеҙҙең ҡарамаҡта, шуға интернатта тәрбиә эше ойоштороу енелерәк, тип әйтеүселәр булыр. Әлбиттә, уҡыу йортонда тәрбиәгә ҙур урын бүленә, шулай ҙа тәрбиәнең 80 проценты ғаиләнән тора. Уҡыусыларҙың атаәсәһе яндарында булмаһа ла, тәрбиә процесында әүҙем ҡатнаша һәм беҙҙән уҡыусыларға һәм тәрбиәселәргә ярҙам итә.

→ **Рәфил ФӘТИХОВ, Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты директоры:**

• Оптималләштереү кире йоғонто ғына яһай, сөнки беҙ ябай мәктәп түгел, интернат мәктәбе. Акса етмәү сәбәпле, етәксе штатты ҡыҫҡартырға мәжбүр була, ә интернат мәктәбендә кадрҙар, киреһенсә, етешмәй. Мәҫәлән, социаль педагогты ҡыҫҡартып ҡарағайныҡ, эш бөтөнләй туҡталды, сөнки балаларҙың социаль кимәле төрлөсә, кемдер яҡшыраҡ йәшәгән ғаиләнән, кемдер насарыраҡ, кемдер бөтөнләй етем. Әлеге ваҡытта уҡыу һәм тәрбиә эше буйынса директор урынбаҫарҙарының эше күп һәм социаль эште уларға алып барыуы ауырға төшә. Ошо бер генә миҫалдан күренеүенсә, мәктәптә һәр береһе үҙ урынында кәрәк. Хатта вожатыйҙар эшен бөтөрөү ҙә белем биреү һәм тәрбиә эшенә оло зыян килтерә.

• Икеһе лә мөһим, белем менән тәрбиәне айырып ҡарау дөрөҫ түгел. Бөгөн мәктәптәрҙәге ике директор урынбаҫарының да бурыстары бер үк. Мин - белем, ә һин тәрбиә бирәһең, тигән ҡараш юҡ. Ҡайһы бер кеше - белем, ҡайһыһы - тәрбиә мөһим, тип әйтә ул, әммә был ике төшөнсә бергә ҡаралырға тейеш. Белемле, аҡыллы кешенең рухи, күңел байлығы булмау сәбәпле, енәйәтсе булып китеүе бар. Мәктәптә тәрбиә эше яҙыусылар менән осрашыу, театр, киноға ғына йөрөү түгел, унда төрлө фәһемле аңғәмәләр һ.б. ойоштороу ҙа. Белемле кеше тәрбиәле булғанда ғына аяғында ныҡлы баҫып тора аласаҡ. Бер заман илдә спортҡа иғтибарҙы саманан тыш арттырып ебәргәйнек. Кешенең тәне ныҡ булып та, белеме ҡаҡшаһа, тәрбиәһе булмаһа, ул камил шәхес була алмай. Спорт тәрбиәләй, тиҙәр ҙә ул, әммә белеме лә булырға тейеш уның. Һынлы сәнғәт гимназияһы булғас, буласаҡ рәссамға математика нимәгә ул, тигәнерәк ҡараштар осрай. Әгәр бала мәктәпте тамамлағас, рәссам булып китһә лә, уның теүәл фәндәрҙе белеүе тормошта гел ярҙам ғына итәсәк.

→ **Рүзидә ҮТӘШЕВА, Сибай ҡалаһының 2-се гимназияһы уҡытыусыһы:**

• Был оптималләштереүҙең мәғариф системаһына килтергән файҙаһы йәки зыяны тураһында киләсәк яҡшыраҡ күрһәтер, әммә 30 йылдан ашыу эш стажы булған уҡытыусы булараҡ, шуны әйтер инем: мәктәп тәрбиәһе тағы ла энтузиаст уҡытыусылар иңенә генә терәлеп ҡалды. Эш хеҙмәт хаҡында ғына түгел, тигән булһаҡ та, эш хаҡы түбән урынға йәш белгестәр килергә атлығып тормаясаҡ. Ярай, беҙ, өлкән кешеләр, йыйырын йыйып, туплар доньяны туплағанбыҙ, былай ҙа ауыр заманда йәштәргә ҡыйын. Дәрестәр һаны кәмей, тимәк, күп уҡытыусылар эшһеҙ ҡаласаҡ. Унан тағы ҡурай, бейеү кеүек баланың милли рухын үҫтерә торған түңәрәктәрҙең бөтөүенә борсолам, сөнки бындай шарттарҙа баланы рухи яҡтан әҙерләп бөтә алмаясаҡбыҙ, ә был ҡасан да булһа үҙенең әҙемтәһен күрһәтәсәк. Әлбиттә, милләте өсөн янып-көйгән уҡытыусы ул түңәрәктәрҙе бушлай ҙа үткәрә ала, тик ундай уҡытыусылар һаны күпме икән? Тимәк, һығымта бер генә: бер ниндәй реформаларға ҡарап тормай, уҡытыусыға ижади янып йәшәргә генә ҡала.

• Тәрбиә һәм белем бергә үрелеп бара торған ике төшөнсә. Һәр бер дәресең белем биреү генә түгел, ә тәрбиәләү сығанағы ла. Таҡтала ниндәйҙер теманы аңлатып тороу ғына- ул көршәк әүәләү генә, көршәктең эсен тултырырға ла кәрәк бит әле. Элек-электән мәғариф системаһында уҡыусыны гуманизм нигеҙендә тәрбиәләү тигән бөйөк маҡсат булды, бөгөн дә белем биреүҙе тәрбиә нигеҙҙәре, әхлаҡ ҡанундары менән ҡуша алып барғанда ғына оло йөрәкле, изге күңелле шәхес тәрбиәләргә мөмкин.

ҺОРАУ - ЯУАП

# ДӘҮЛӘТ БИЛӘМӘҺЕН ҮТЕР ӨСӨН... документтар теүәллә

**Йәйге отпускылар ваҡытында бәлиғ булмаған граждандарға дәүләт биләмәләрен үткән саҡта ниндәй документтар кәрәклеге тураһында мөрәжәғәт итеү осраҡтары йышайҙы.**

БР буйынса Федераль миграция хеҙмәте идаралығы Рәсәй Федерацияһының бәлиғ булмаған гражданы ниндәй йәштә булыуына ҡарамаҫтан, ил сиген тик сит ил паспорты булған саҡта ғына үтә ала, тигән мәғлүмәт бирә.

Граждандарҙың сәфәре тураһында Рәсәй Федерацияһының ике яҡлы хөкүмәт-ара килешеүе булған БДБ илдәренә (Беларусь, Украина, Ҡаҙағстан, Молдова, Әрмәнстан) 14 йәшкә тиклемге балалар тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ, ә 14 йәштән өлкәндәр - РФ паспорты буйынса сыға ала.

Рәсәйҙең бәлиғ булмаған гражданы РФ дәүләт сиген ата-әсәһенең береһе менән уҙған саҡта, уларҙың икенсеһенең үҙенең балаһының Рәсәй Федерацияһынан ситкә сығыуына риза түгеллеге тураһында сик буйы органдарына ғариза килмәһә, икенсеһенең ризалығы кәрәк түгел. Был осраҡта туғанлыҡты иҫбат итеүсе документтар талап ителәсәк. Әгәр ата-әсәнең, уллыҡҡа алыусының, опекундың йәки бағыусының береһе бәлиғ булмаған граждандың Рәсәй Федерацияһынан ситкә сығыуына ризаһыҙлығын белдерһә, был мәсьәлә суд тәртибендә ҡарала.

Рәсәйҙең бәлиғ булмаған гражданы Рәсәй Федерацияһынан ата-әсәһе, уллыҡҡа алыусыһы, опекуны йәки бағыусыһы оҙатылыуынан тыш сыҡҡан осраҡта, ул үҙе менән паспорттан тыш атап үтелгән кешеләрҙең китеү ваҡыты һәм ул барасаҡ дәүләттә күрһәтелгән нотариаль рөхсәтен алырға тейеш. Был осраҡта, әгәр ата-әсәнең береһенән балаһының ситкә сығыуына ризаһыҙлығы тураһында ғариза килмәһә, уларҙың икенсеһенең рөхсәте етә.

Шулай уҡ сикте үткән саҡта бәлиғ булмаған кешенең РФ гражданы икәнлеген раҫлаусы документ кәрәк. Был түбәндәге документтарҙың береһе булыуы мөмкин: ата-әсәнең береһенең балалары тураһында мәғлүмәттәр булған РФ гражданы паспорты; ата-әсәнең сит ил паспортында балалары тураһында мәғлүмәттәр; 14 йәшкә еткән баланың үҙенең РФ гражданы паспорты; баланың сит ил паспорты; тыуыу тураһында таныҡлыҡ.

Балаларҙың гражданлығын раҫлау ата-әсәнең йәки закон вәкилдәренең БР буйынса Рәсәйҙең территориаль органдарына мөрәжәғәт иткән осраҡта рәсмиләштерелә. Быны өсөн түбәндәге документтар кәрәк: тыуыу тураһындағы таныҡлыҡ; ата-әсәнең паспорты.

**Салауат ХИЛАЛОВ.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Бал ҡорто шифаһы



Ҡаты ревматизм үткәргәндән һуң ныҡлап аяҡҡа баҫып китә алмай яфаланһағыҙ, бал ҡорттарынан сағылып ҡарағыҙ. Сәскәгә ҡунған бал ҡортон ҡанаттарынан тотоп алып, ауыртҡан урынға ҡуйырға. Беренсе көндә бер бал ҡорто, икенсе көн - ике бал ҡортонан сағылырға кәрәк. Тик икенсе көндә ҡортто тәүге тешләнгән урындан 1,5-2 см-ға ситкәрәк ҡуйырға кәрәк. Артабан көн һайын 1-әр бал ҡортона арттыра барып, 5-кә еткергәс, 1-2 көн ял итеп алығыҙ. Шунан дауаны 5 бал ҡортонан башлап, 1-әргә кәмәтә барырға кәрәк. Әгәр ҙә 1 сеанстан һуң ауыртыу ҡалһа, бер аҙнанан тағы шул тәртиптә ҡабатларға. Кәрәк икән, икенсе курстан һуң ике аҙна ял итеп, тағы ҡабатлағыҙ. Унан һуң был сирҙең нимә икәнен дә онотороғоҙ. Күп осраҡта өсөнсө курстың кәрәге лә булмай. Тик был дауа бал ҡорто сағыуына аллергияһы булған кешеләргә ярамай.

## Быуын һыҙлағанда

Быуындар һыҙлағанда 3 кипкән инжирҙы, 4 күрәгәне ит турағыстан үткәреп, 2 балғалаҡ һыуһынды (сабельник) ҡәһүә онтағыста ваҡлап ҡушырға һәм ҡайнар һыу ҡойоп, бер аҙ йылымсы хәлгә килгәнен көтөргә. Уға 2 ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға ла көнөнә 3 тапҡыр 1-әр ҡалаҡлап ашарға. 10 көн дауалангас, 20 көн ял итергә һәм кәрәк булһа, тағы ҡабатларға.

Шулай уҡ ревматоид полиартрит бөтмәй йонсота икән, быуындарҙы йылы ғына кесерткән миндеге менән сабырға. Кесерткән миндеген бешекләмәй, ә йылы быуҙа әҙерәк тотоп ҡына алырға кәрәк. Кесерткәндәге күп әүҙем матдәләр, ҡырмыҫҡа кислотаһы быуындарға бик килешә, бары тик бер нисә тапҡыр ҡулланырға онотмағыҙ. Һәр мунсаға яңы миндек кәрәк.

## Инжир

Инжир ашҡаҙан эшмәкәрлеген яйлай, уның составындағы витаминдар, биологик әүҙем элементтар, калий бар организмға яҡшы тәьҫир итә, тимер ҡанды һәйбәтләй. Тик был емеш оҙаҡ һаҡланмай, һатып алғанда ул боҙолмаған булырға тейеш.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**




## ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

### Атай әҙәбе

● Был донъяла кешеләрҙең ҡиммәте тик үҙ тырышлыҡтары менән булыуын һәр кем үҙ эшен үҙе күрергә бурыслы икәнен балаларығыҙға аңлатығыҙ. Кешегә таянып һәм тик бәхет һәм хәйер-доғаларға ышанып торорға өйрәнмәһендәр.

● Иман һәм дин хөкөмдәрен, фарыз, важиб һәм харамдарҙы өйрәтегеҙ, ғәмәлдәрҙе ҡылдырырға ғәҙәтләндерегеҙ (Дини тәрбиәне йәш сағында алған бала ҙурайғас та юғалмаҫ).

● Балаларығыҙға файҙалы маҡсаттар хасил итеүҙә ярҙам бирегеҙ, мөмкин булһа, был юлда аҡса ҡыҙғанмағыҙ. Уларҙы кеше ишектәренә йөрөргә, хәйерһеҙ эш эшләргә мәжбүр итмәгеҙ.

● Балаларығыҙ өсөн мал йыйып та тәрбиәләренә иғтибарһыҙ ҡалмағыҙ, малды уларҙың тәрбиәһе юлында сарыф итегеҙ. Бөтмәй торған мираҫ - гүзәл тәрбиә биреү икәнен белегеҙ. Дөрөҫ тәрбиә булмаһа, балалар өсөн донъя тулы алтын ҡалһа ла файҙаһы булмаҫ. Тәрбиәһеҙлектәре - бәхетһеҙлектер, уның өҫтөнә мираҫ итеп ҡалған алтындар икенсе бәхетһеҙлек булыр.

● Балаларығыҙҙы мәҙрәсәгә ебәреп, үҙегеҙ уларҙың хәлен белешмәй тормағыҙ.Даими хәлдәрен күҙәтегеҙ, бөтәһен дә күҙ уңында тотоғоҙ. Хатта китап, яҙыу әсбаптарына тиклем аңлап, белеп тороғоҙ.

● Ихтыяждарын үтәгәндә һәм кәрәктәрен етештергәндә бөтәһен дә бер тигеҙ күрегеҙ. Бүләк биргәндә барыһына ла тигеҙ бирегеҙ. Бындай нәмәләр уларға ғәҙеллек һәм инсафлыҡ өйрәтеү була. Береһенә йәшереп бер нәмә биреп: "Һаҡ бул, туғандарың белмәһен!" - тип әйтеүҙән һаҡланығыҙ. Сөнки былай итеү уларға йәбер һәм золом, алдау һәм хыянат кеүек нәмәләргә өйрәтеү, һаранлыҡ һәм үҙ-үҙен һөйөү кеүек боҙоҡлоҡ орлоҡтарын күңелдәренә сәсеү була.

● Көстәре етәрлек булғас, балаларығыҙға эштәрегеҙҙе һәм һөнәрҙәрегеҙҙе өйрәтегеҙ. Фекерҙәрегеҙ менән таныштырығыҙ. Донъя көтөү өсөн уларҙың күҙен асығыҙ. Тормош ҡағиҙәләрен аңлатығыҙ. Хеҙмәтселәрегеҙ менән түгел, үҙегеҙ менән бергә йөрөтөгөҙ. Ашау-эсеү ваҡытында күҙ уңында тотоғоҙ. Зиһендәрен асырлыҡ нәмәләр һөйләгеҙ һәм нисек булһа ла аҡылдарын нурландырығыҙ. Кәсеп һәм һөнәрҙәр менән дуҫлаштырығыҙ. Ваҡыты еткәс, изге ғаилә ағзалары менән өйләндерегеҙ.

● Балаларығыҙҙы кеше итеп иҫәпләгеҙ, уларҙың әҙәм булыуҙарын теләгеҙ. Әсәләре менән гүзәл һәм шәриғәт әҙәбе буйынса мөнәсәбәттә булығыҙ. Бала мөхәббәте ата менән әсә араһында уртаҡ икәнен балаларығыҙға ғәмәлдәрегеҙ менән белдерегеҙ. Әгәр улар һеҙҙән бындай нәмәләрҙе күреп үҫһәләр, үҙҙәре һеҙҙән алған тәрбиәләре арҡаһында үҙ ҡатындары менән дә гүзәл тормош көтөрҙәр һәм үҙ балаларын тәрбиәләгәндә кәмселектәр күрһәтмәҫтәр.

● Ваҡыты еткәс, әҙәп ҡағиҙәләре менән таныштырығыҙ. Ҡөрьән шәрифте өйрәтегеҙ. Көсөгөҙ еткәнсе нәфәкә бирегеҙ. Тәрбиәләгеҙ, донъяла йәшәү өсөн кәрәкле кәсеп һәм һөнәрҙәрҙе яратып өйрәтегеҙ. Күңелдәренә көс бирегеҙ, олуғ кешеләрҙең тормоштары тураһында һөйләгеҙ.

● Ҡыҙҙарығыҙҙы камил иғтибар менән уҡырға, яҙырға өйрәтегеҙ. Ваҡыты еткәс, тик байлыҡҡа ғына ҡарап, тәрбиәһеҙ, үҙҙәренә тиң булмаған ҡарттарға түгел, тәрбиәле, гүзәл тәбиғәтле кешеләргә тапшырырға тырышығыҙ. Туй һәм йыһаз өсөн артыҡ мәшәҡәтләнмәгеҙ. Тәрбиәле булыу кеүек бөйөк йыһаз һәм шөһрәтле туй һис табылмаҫ.

**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА*

# ТӘНӘЙҘӘРГӘ ТӘҒӘЙЕН ТӘРБИӘ




### Етенсе һабаҡ: "Бала ни өсөн алдаша?"

Бала бәләкәй сағында уйлап сығарып һөйләргә ярата. Ни генә һөйләмәй ҡайһы бер балалар! Әммә быны алдау тип баһаларға ярамай. Киреһенсә, уға ҡушылып, тағы ла сурытыбыраҡ ебәреп, балала фантазияны көсәйтергә кәрәк. Шул саҡта уның ижади һәләтенә юл ярыласаҡ.

Ләкин шунышы ла бар: бер үк ваҡытта бала үҙе уйлап сығарған нәмәгә ололарҙың ышанмауын, фәҡәт уйлап сығарылған ҡыҙыҡ хәл итеп кенә ҡабул итеүен дә аңлаясаҡ. Әгәр баланың фантазияһын үҫтерәм тип, уның уйҙырмаларына ышанған кеше булып, баш ҡағып ултырһаң, әлбиттә, ул аҙаҡ алдауға оҫтарып китәсәк. Һәм хатта һин үҙең дә ул һөйләгәндәрҙең ысынмы, уйҙырмамы икәнлегенә төшөнмәй башлаясаҡһың.

Әле һүҙ баланың ни өсөн алдауы, алдарға өйрәнеүе хаҡында. Иң төп сәбәптәрҙең береһе - ҡурҡыу. Әсәйҙән, атайҙан, уҡытыусынан, яуаплылыҡтан ҡурҡыу. Шуға күрә бала бәләкәй сағында ла, буй еткергәс тә эш боҙа икән - әрләргә, туҡмарға, оялтырға, намыҫына тейергә, бигерәк тә кеше алдында йөҙөн йыртмаҫҡа кәрәк. Атай-әсәй, ғөмүмән, өлкәндәрҙең аҡылы шунда күренә лә инде. Бала эш боҙмаған мәлдә, кем дә аҡыллы күренә. Ә бына балаң тәртипһеҙлек ҡылғанда һинең дә, баланың да холҡо һынала. Бала ниндәй генә эш боҙһа ла ҡаты бәрелеүҙән, ҡул күтәреүҙән үҙеңде тыйырға кәрәк.

Балаға шелтә - эш боҙғаны өсөн түгел, ә алдағаны өсөн булырға тейеш. Сөнки эш боҙғанлығын, боҙорға ярамағанлығын үҙе лә аңлай ул. Аңлағанға ла яуаплылыҡтан ҡотолоу юлдары эҙләй. Әйтәйек, "Сынаяҡты кем ватты? Дөрөҫөн әйтһәгеҙ - әрләмәйем. Алдаһағыҙ - эләгәсәк. Сөнки әсәйҙәр дөрөҫөн барыбер беләсәк. Әсәйҙәргә тәбиғәт һиҙҙертә. Ә миңә үҙегеҙҙең әйтеүегеҙ мөһим", тип һорарға кәрәк. Тик ирекһеҙләү, тиҙерәк әйт, тип, йоҙроҡ болғап тороу ярамай. Баланың ҡапыл ғына әйтергә ҡыйыулығы етмәй икән, бер аҙҙан әйтер. Ғәйепте таныу бер ваҡытта ла һуңламай. Ә бына яңылыш рәнйетеү, бала йөрәгенә ҡурҡыу һалыу, аҙаҡ ҡулдан ысҡындырыу, бала күңелендә үҙеңә ҡарата һыуыныу тойғоһо һалыу күҙ асып йомған арала килеп сыға. Аҙаҡ инде: "Ҡайҙа, ҡасан, ҡайһы мәлдә ысҡынды ул ҡулымдан. Мин бит бөтөн ғүмеремде уға бағышлағайным", - тип, терһәк тешләрҙәй булып йөрөмәҫ өсөн, бала күңеленә бик һиҙгер булырға кәрәк. Ышанырға, шул уҡ ваҡытта күҙҙән дә ысҡындырмаҫҡа.

Баланың тәүге яңылышыуын күргәс тә ҡаты яза биреүҙән һаҡ булырға кәрәк. Бәлки, абайламаҫтан килеп сыҡҡандыр ул яңылышлығы? Әгәр яңылыш эшләгән тәүге хатанан уҡ ҡаты яза бирелһә, бала күңеленә ҡурҡыу тойғоһо һалынһа, бала алдау юлына баҫасаҡ. Бер яңылышыу, алдау - һағайтһын, хәтер һандығында тот һәм уға һиҙҙермәй генә күҙәт. Баланың был хаталаныуы икенсе тапҡыр ҡабатланһа, белгәнеңде һиҙҙерт, әммә яза биреүҙән һаҡ бул, өсөнсө тапҡыр инде - етди һөйләшеү, аңлатыу мөһим. Ул саҡта ла аңлатыуҙың юлдары төрлө була. Йә һүҙ менән, йә өлгө менән, йә алдашыуҙың насарлыҡҡа алып килгәнлеген үҙенең үк эш боҙоуынан килеп сыҡҡан күңелһеҙ хәл йәки уға билдәле берәй ваҡиға аша аңлат.

Шуны һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк: бала бер әйтеүҙән генә аңламай, бер тапҡыр әйттем бит, ни эшләп оноттоң, тип икеләтә яза биреү дөрөҫ булмай. Шулай уҡ баланың хатаһын даими иҫкә төшөрөп, ошо хатаһы менән "сыбыртҡылап" тороу уғата дөрөҫ түгел. Бала төрлө холҡло була. Ул төҫө, фиғеле менән өлкәндәрҙән кемгә оҡшаған, ул ниндәйерәк кеше - быны ла иҫтә тоторға кәрәк. Тик, әлбиттә: "Һин тегегә оҡшағанһың, быға оҡшағанһың, һинән йүнь сыҡмаҫ, нәҫелегеҙ тегеләй ҙә былай", - тигән ҡараштан түгел, ә уның бөгөнгө булмышынан сығып, үҙ баланды дөрөҫ йүнәлештә тәрбиәләүҙе күҙҙә тотоу мөһим. Сөнки "алма ағасынан алыҫ төшмәй" тигәндән сығып, туғандар араһынан уға оҡшаш холоҡло /минең күҙәтеүҙәрем буйынса, ғәҙәттә төҫ-башы оҡшаған туғанына холоҡ-фиғеле лә тартым булыусан/ ҡан ҡәрҙәше менән сағыштырып, баланың күңел торошон аңларға тырышырға кәрәк. Бала менән серҙәш, дуҫ булыу бик күп тайпылыштарҙан ҡотҡара. Әммә инде бала күңеленә юл таба алманыңмы - уның күңеленә юл яҡынайтыу сараһын һис кисекмәҫтән эҙләргә кәрәк.

Атай-әсәйҙәрҙең төп хаталарының береһе - баланы үҙеңсә итергә маташыу, бала күңелен аңламау һәм аңларға тырышмау, баланы шәхес тип ҡарамау. Бала күңелен аңларға тырышмауҙан уның холҡон да аныҡ ҡына билдәләй алмайбыҙ. Ҡайһы саҡта баланың өнһөҙтынһыҙ буйһоноуын, күп осраҡта өндәшмәй ҡалыуын аҡыл тип уйлайбыҙ. Уның аҫтыртынлығын күрә белмәү ошонан килеп сыға. Икенсе хата - тәрбиәләүҙәге үҙ хатабыҙҙы күрмәү йәки һуңлап күреү.

Балаға бәләкәйҙән төшөндөрә торған төп хәҡиҡәттәрҙең иң мөһиме - үҙ намыҫың алдындағы яуаплылыҡ. Алдап та, хәйләләп тә, юхалап та, ялағайланып та, ярамһаҡланып та яуаплылыҡтан ваҡытлыса ҡотолоп булыр. Әммә үҙ намыҫың алдындағы яуаплылыҡ һинең үҙ ғүмереңдән дә күпкә оҙайлыраҡ.

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәрйәм апай Бураҡаева башлап ебәргән был эшкә - мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы тәрбиәләү әсбабын яҙыуға башҡа педагогтарҙың, өләсәй-олатайҙар, атай-әсәйҙәрҙең дә ҡушылыуын теләйбеҙ: үҙ һабаҡтарығыҙ, кәңәш-фекерҙәрегеҙ, тәжрибәгеҙ менән һеҙ ҙә уртаҡлаша алаһығыҙ. Милләт киләсәге - ошо тәнәйҙәр ҡулында һәм тәнәйҙәребеҙҙе дөрөҫ тәрбиәләүгә бөтөн көсөбөҙҙө һалырға тейешлегебеҙ хаҡында тағы бер тапҡыр уйланайыҡ әле, йәмәғәт. Хаттар-хәбәрҙәр көтәбеҙ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

## ДУҪТАР...

### кәрәк тә, кәрәкмәй ҙә

Күптән хыял иткән ниәтемде бойомға ашырҙым. Ҡыуанысымдың иге-сиге юҡ. Шатлыҡ-ҡыуаныстарыңды кем менән уртаҡлашаһың инде - әлбиттә, дуҫтарың менән! Уртаҡлаштым... Уртаҡлаштым да бер дуҫымды юғалттым... "Ысын дуҫ яҡынының уңыштарына шатлана. Дуҫ булып ҡыланғаны - уңыштары өсөн күрә алмай", - тигән бер аҡыллы кеше. Дуҫтар бәлә килгәндә һынала, тиҙәр шул. Ә мин ошо хәлдән һуң уңыштарыма, шатлыҡтарыма ихлас күңелдән ҡыуана һәм уртаҡлаша белгән дуҫтарымды барлап ҡараным. Эйе, шатлыҡ килгәндә һынала ысын дуҫ! Кемгә нисектер, ләкин минең өсөн был хәҡиҡәт.

"Кешенең иң яҡын дуҫы - ул үҙе", тигән бер аҡыл эйәһе. Был фекер ҙә ысынбарлыҡҡа тура килә. Хәйер... Нисек кенә булмаһын, дуҫтарһыҙ ҙа донъя йәмһеҙ бит әле, шулай түгелме ни? Быуаттар буйы эҙләнгән был һорауға яуапты табыр өсөн дә янында дуҫтар кәрәк шул...

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Беҙҙең менән килгән башҡорттар таң һарыһынан әсе тауыштар сығарып, ҡысҡырыша һәм таш тыҡылдата башланы. Янығыҙҙа бер генә башҡортто күрмәһәк тә, ошо ғәҙәти булмаған туҡылдау йоҡо аралаш беҙҙә бер ни тиклем ҡурҡыуға һалды: уларҙың ҡайһылары тау аҫтындағы йылға ярында, икенселәре тау буйлап һыбай сабышып йөрөп, үҙҙәренең вокаль һәм инструменталь музыкаһын дауам итте. Әммә тиҙҙән беҙҙең ҡурҡыуыбыҙ көлкө һәм үҙенә күрә ләззәт табыу менән алышынды. Башҡорттарҙың шау-шыуына ғәҙәттә ҡая таштарҙа оя ҡорған ыласындар сәбәпсе булып сыҡты. Тәбиғәттәре буйынса йыртҡыс ҡоштарҙы тотоуға үтә әүәҫ булған башҡорттар һәр саҡта ла йәш ыласын балаларын ояларынан алып ҡайтып, өйҙәрендә бик тырышып тәрбиәләй: әоло шау-шыу күтәреүҙәре ыласындар оя ҡорған урынды табыу өсөн башҡарыла; ошондай тауыш сығыуы уларҙы ҡурҡыта һәм ояларынан осоп китергә мәжбүр итә. Беҙҙең ҡош тотоусыларыбыҙ иртүк өс ҡош ояһын тикшереп, оло ҡыуаныс менән уларҙан табыштарын алырға әҙерләнде. Был табыш уларға ҙур ауырлыҡ менән эләгә, сөнки ыласындар ояларын ҡаяларҙа ҡора, һәм ояға тиклем өҫтән утыҙ һәм унан да күберәк сажин аҫҡа төшөргә кәрәк була. Беҙҙең ыласын аулаусы эшмәкәрҙәр бөтә булған арҡандарын йыйып, бергә ҡушып бәйләгәс, уның осона тағып ҡуйылған таяҡ тап ыласын ояһы тапҡырына еткәнсе тауҙан түбәнгә төшөрҙө, ә арҡан буйлап төшөүсе башҡорт оянан ыласын балаларын алғас, уны тотолған ҡош балалары менән тау итәгенә тиклем төшөрөргә тура килде, ә был барлығы етмеш сажин самаһы булды. Ошо ҡыйыулыҡ талап иткән, әммә башҡорттоң күнеленә йәтеш эште атҡарғанда уларҙың аяҡ-ҡулдары һыныу осраҡтары һирәк түгел, ҡайһы саҡта осоп төшөп үлеүселәр ҙә була.

Ыласын тотоп ҡыуанған башҡорттар беҙҙе шул уҡ тауҙағы мәмерйәгә алып китте. Уның ауыҙы тау итәгенән ун ике сажин тирәһендә булып, уға тиклем ошонда ятҡан оло-оло таш ҡабандарға баҫып менеп була. Ул дүрт мөйөшлө фигура рәүешендә; бейеклеге - һигеҙ, киңлеге ун сажин самаһы, көньяҡ-көнсығыш яҡҡа ҡаршы урынлашҡан. Мәмерйәгә кергән урында дүрт мөйөшлө ҙур таш ҡабандар ята; ҡайһылары өҫтә аҫылынып тора, был мәмерйәгә инеп йөрөү өсөн хәүефле. Мәмерйә тишегенән уның ишек алды, тип атап булырҙай өлөшө башлана. Уның киңлеге - алты, оҙонлоғо ун һигеҙ сажинлап булыр; үрге яғы тарлауыҡ менән тамамлана, икенсе осо күренмәй: ҡарамаҡҡа бейеклеге егерме сажин тирәһе булыр. Уның осона табан уң яҡта аяғөҫтә торған кеше бейеклегендәге тәпәш палата бар. Уның формаһы төҙөк түгел, бар ерҙә лә тар ғына ярыҡтар күренә.

Тауҙарҙағы ҡалын ҡара урмандар һәм бейек ҡарағайҙар башҡорттар өсөн бик мөһим булған эштәрҙе һәм промыслаларҙы күрһәтеп тора. Янында күс булып, бал ҡорттары ғәжләп тормаған таҙа һәм шыма ҡарағай һирәк булалыр бында. Башҡорттарҙың ҡорт ҡарауы уғата оҫта һәм ҡыҙыҡһындырырлыҡ булһа ла, был турала яҙып тороуы артыҡ булыр. Ошо турала мөмкин булған бөтөн теүәллегендә статский советник Рычков әфәнде тарафынан тасуир ителгән; ә минә башҡорттар бал менән һыйланырға әүәҫ булған айыуҙарға ҡаршы ҡулланған бер ысул тураһында ғына һөйләргә ҡала.




Башҡа бер һаҡланыу сараларына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең солоғона айыу эйәләшкәнен белеп ҡалһалар, улар ҡыҙа тип аталған ябай тоҙаҡ ҡора (һүрәтте ҡарағыҙ). Солоҡ ағасы тирәләй ҡаҙыҡтар (а) ҡағып, ситән үрәләр, айыу солоҡ ағасына килеп йөрөгән яҡтан ике аршин киңлегендә тишек ҡалдыралар. Тишектең бер яғынан оҙон буйлы кешенең тубығына етерлек бейеклектәге ҡаҙыҡ (b) ҡағыла, унан бер сажин тирәһендә туралап икенсе ҡаҙыҡ (с) ултыртылып, улар сит ҡаҙ (d) тип йөрөтөлгән арҡыры кәртә менән тоташтырыла. Арҡыры кәртәгә ҡаршы яҡтан ике сажин алыҫлыҡта тағы ла ике ҡаҙыҡ (е һәм f) ултыртылып, улар араһына сей ҡараманан йәйә тип аталған ҡолға (g) ҡыҫтырыла, уның осона (h) штау (тышау. - Ред. иҫк.) тигән бау (путо) бәйләнә. Тышауға ҡандаҡ (k)тип аталған һаҡ таяҡсығы (сторожок) беркетелә; йәйәне (g) тарттырғас, ул арҡыры кәртәләге (d) киртеккә (i) эләктереп ҡуйыла. Йәйәнең икенсе яғына арҡыры кәртә (d) буйлап уның менән бер оҙонлоҡта булған йыуан уҡ, йәйәһә һөңгө киҫәге (m) беркетелә. Һаҡ таяҡсығы осона нәҙек бау (n) тағылып, уның осо тишектең икенсе яғындағы ҡаҙыҡҡа (о) тарттырмайынса ғына, һәленеп торорлоҡ итеп, беркетелеп ҡуйыла. Бау (q) артыҡ күренеп тормаҫлыҡ булһын өсөн, тишек (pp) бер аҙ сыбыҡ-сабыҡ менән ҡаплап ҡуйыла. Өйрәнелгән юлы менән тишек (pp) аша солоҡҡа табан үтеп кереүсе айыу сыбыҡ-сабыҡты ла ҡуҙғатып, бауҙы(q) ла эләктереп алып китә; ошоноң һөҙөмтәһендә һаҡ таяҡсығы (k) урынын килеп сыға, ә тарттырылып ҡуйылған йәйә (g) уҡҡа (m) һуғып ебәрә, ул айыуҙың ҡабырғаһына, йәиһә күкрәгенә ҡаҙала: һөҙөмтәлә ул йә ошонда уҡ, йә бер аҙ ситкә китеп, йән бирә.

Таулы, урманлы һәм юлһыҙ ерҙәр беҙҙе Ағиҙел йылғаһын ҡалдырып, урау юлдар менән китергә мәжбүр итте. Шулай итеп, беҙ шул уҡ көндө Ағиҙел аша сығырға булдыҡ. Бында бер ниндәй күпер ҙә, йылға аша сығарыусы һал да юҡ ине, беҙ кисеүҙән сығырға тейеш булдыҡ. Кисеүҙән сығыу әллә ни ауыр эш булмаһа ла, йәй уртаһында Ағиҙелдең шәп ағымлы булыуы тотҡарлыҡ тыуҙырмай ҡалмай: менге ат та ағым һыуға ҡаршы бик ауыр бара. Төрлә ағымдарҙы үтер өсөн таштар теҙмәһе тип йөрөтөлгән һай урындарҙы һайлай белергә кәрәк, ә улар һыу ағымына ҡаршы йә аҫтараҡ, йә өҫтәрәк ята. Ошо шарттар беҙҙе кисеүҙә кискә тиклем тотҡарларға мәжбүр итте; шул саҡта ла беҙ йылға аша бер зыянһыҙ ғына сыға алманыҡ. Инде бына беҙҙең күҙ алдыбыҙҙа ҙур булмаған урмандар менән биҙәлгән асыҡ дала пәйҙә булды: урыны-урыны менән бейек булмаған тау һырттары күтәрелеп тора, улар, башлыса, урманһыҙ булып, ғәжәп матур үләндәргә бай ине...

...24 числола беҙ Ҡыҙыл Мәсет тигән башҡорт ауылына тиклем 27 саҡырымдан да алыҫыраҡ китә алманыҡ. Ярсүбәк йылғаһына ҡойоусы Терәшле, Һаҡмар менән тоташҡан Ыҡ кеүек бәләкәй йылғасыҡтар ҙа беҙҙең юлыбыҙға оло ҡаршылыҡ булды; беҙ үҙебеҙҙең артелебеҙ менән күпер һалырға ла мәжбүр инек. Ҡыҙыл Мәсет ауылында беҙ көлкөлө лә, ҡыҙғаныс та булып тойолған башҡорт хөрәфәтен тамаша ҡылдыҡ. Мин уларҙың береһенән дә ошо яңылышыу сәбәбен һорашып белә алманым; тик шуны ғына аңланым: Шайтан Уйыҡ (автор "Бесовая игра", тип тәржемә иткән, тимәк,уйын, тип уҡырға кәрәк. - Ред. иҫк.) тип аталған хөрәфәт күбеһенсә йәкле башҡорт ҡатындарына ҡағыла. Аҫыраныр алдынан берәй башҡорт ҡатыны ауырый башлаһа, бигерәк тә ҡорһағында ныҡ көсәйә барған ауыртыу тойоп, тулғаҡ тота башлай икән, быны башҡорттар бер ниндәй сәбәпһеҙ ен-бәрей ҡағылыуы менән бәйләй: был осраҡта улар үҙҙәренең башҡа бөтөн ғәҙәти сараларын етерлек түгел, тип иҫәпләп, үҙҙәре Шайтан Күрәҙә (автор "чертовидец", тип тәржемәләй, хәҙергесә күрәҙәсене аңлата. - Ред. иҫк.) тип атаған сихырсыларынан ярҙам эҙләй. Бындай кешеләр уларҙа айырыуса ихтирам ителә, шулай ҙа улар бик һирәк осрай; ҡай сағында улар артынан биш йөҙ саҡырым һәм унан да алыҫыраҡ ергә баралар. Беҙ күргән Шайтан Күрәҙә оло кәүҙәле йәш кеше ине, уға ошо һөнәр олатаһынан мираҫҡа ҡалған. Ҡатыны сирле булған хужа башҡорттар өсөн мәжлес уҙғарырға тейеш ине. Бында ике енестән дә бик күп йәш кешеләр йыйылды, һәм ауырыу ҡатындың өйөндә улар ҡаты ҡысҡырып һәм шаулашып, үҙҙәренең ғәҙәти бейеүҙәрен башлап ебәрҙе. Шайтан Күрәҙә әйтеүенсә, улар быны ен-бәрей, күп кешеләрҙән ҡурҡып, өйгә инмәһен өсөн эшләй; ул кешеләр киткәнен ҡурала йә, башлыса, өй ҡыйығы башында көтөп ултыра. Бейеүҙә һәм ҡысҡырыуҙа, дөрөҫөрәге, ҡотороуҙа Шайтан Күрәҙә барыһынан да арттырып ебәрҙе. Уның ҡындан һурылған ҡылысы һәм ике пуля менән ҡоролған мылтығы бар ине. Ярты төн еткәс, Шайтан Күрәҙә иң көслө өс кешене һайлап алып, үҙ янынан ситкә китмәҫкә бойорҙо; ул ен-бәрей менән алышҡа сыҡҡас, үҙен артҡы яҡтан билбауынан һәм итәгенән тотоп торорға ҡушты: сөнки шайтан күреүселәр ябай кешеләрҙе үҙҙәренең үтә көслө ендәр менән оҙайлы көрәшкә сығыуы тураһында ышандыра ала.

**(Дауамы бар).**

*АҒИНӘЙҘӘР МӘКТӘБЕ*

# ЭШЕГЕҘҘЕ КҮРҺӘТЕП ЭШЛӘМӘГЕҘ,

## тип өйрәтте өләсәй

**Әсәйем ҡаты ауырығанға күрә, иҫ белә башлағандан алып, беҙ өс ҡыҙ: мин, Гөлнара һәм Алһыу өләсәйем тәрбиәһендә булдыҡ. Башына төшкән ауыр ҡайғыларға бирешмәй, балаларына әсе ел тейҙермәй, барыһын да эсенә йәшереп, йылмайып ғүмер итте өләсәйебеҙ. Ул әкиәттәрҙе, ҡыҙыҡ хәлдәрҙе, легенда-риүәйәттәрҙе шул тиклем матур һөйләй торғайны. Уның һөйләгәндәрен ауыҙ асып тыңлар инек.**

Ҡөрьән уҡығанмылыр, юҡмы - уныһы беҙгә ҡараңғы, ләкин дингә бәйләп ғибрәтле хәлдәрҙе күп һөйләр ине. "Ахырызаман етер алдынан күрерһегеҙ: һуғыш булмаҫ, әммә кеше аңһыҙ үлем менән ҡырылыр; һауаны тишеп тимер ҡоштар осор; тиҙәк менән һыу алтын урынына булыр". Әле, ысынлап та, кешелек аңһыҙ үлем менән ҡырыла: ҡайҙалыр самолет ауа, поезд шартлай; наркоманлыҡ, эскелек кеүек сирҙәрҙән үлеүселәр күп. Элек ерҙәребеҙ йәйрәп ятҡан, ҡәҙере лә булмаған, ә хәҙер йәшелсә сәсер өсөн дә ерҙе һатып алырға тура килә. Һауаны тишеп тимер ҡоштар осор, тип самолеттарҙы әйткәндер инде. Шулай уҡ, ағастарҙы күп ҡырырға ярамай, гонаһ була, тип әйтер ине. Урмандарыбыҙ ҡырылыуына, һыуҙарыбыҙ ҡороуына йөрәге һыҙланы. Уның тәрбиәһен алғанға күрә, беҙ ҙә илһөйәр булып үҫтек.

Ҡыҙ сағығыҙҙа нимә теләйһегеҙ, шул бойомға ашыр, күп доғалар, теләктәр әйтеп ҡалығыҙ, тип өйрәтте. Ул был мәғлүмәттәрҙе ҡайҙан алғандыр инде?

Бигерәк шаян булды өләсәйебеҙ. Оло булһа ла еңел һөйәкле булды. Беҙҙе бәләкәй саҡтан эшкә өйрәтеп үҫтерҙе. Иртә менән өсөбөҙҙө эйәртеп, бесәнгә алып сығып китер ине. Ун саҡрымдай ерҙе йәйәү йөрөр инек. Артта арба тауышы ишетелһә, тиҙ генә беҙҙе иген араһына йәшереп бөтә лә, үҙе янығыҙға ята. Үҙе ҡыҫтылдап көлә. Теге кешеләр узып киткәс, йәшеренгән еребеҙҙән сығып, ары атлайбыҙ. Сабынлығыбыҙға барып етеү менән бөтәбеҙ ҙә салғыларыбыҙҙы сығарып, шунда уҡ бесән саба башлайбыҙ. Ауыл халҡы был ваҡытта бесәнгә саҡ ҡуҙғала ғына башлаған була әле. Кешеләр беҙҙең сабынлыҡ эргәһенән уҙа башлаһа, өләсәйем беҙгә тағы йәшенергә ҡуша. "Бер ваҡытта ла эшегеҙҙе күрһәтеп эшләмәгеҙ", - тип өйрәтә торғайны. Ә кешеләр ҡайтмаҫ борон беҙ эшебеҙҙе тамамлап, ҡайтып та китәбеҙ. Үҙебеҙ генә булһаҡ та, йыл һайын ике эскерт бесән ултырта инек. Ауыл халҡы: "Был Зөлхизә ҡайһы ваҡытта бесәнен эшләй икән?" - тип аптырар ине. Үҙебеҙҙең бесәнебеҙҙе эшләп бөткәс, күрше ауылдарҙағы туғандарыбыҙға ярҙамға китәбеҙ. Ул ваҡытта автобустар йөрөмәне, йыраҡ ауылдарға ла йәйәү йөрөй торғайныҡ. Өләсәйемдең һөйләгәндәрен тыңлап барғанға күрә, әллә нисә саҡрымдарҙың алыҫлығын да тойманыҡ.

Инде үҙем оло йәштә. Тормош иптәшем менән өс бала үҫтерҙек. Тормош тәжрибәмдә һәр саҡ өләсәйемдең кәңәштәрен, өгөт-нәсихәттәрен иҫемдә тоттом. Һәр саҡ ҡолағым төбөндә яңғырап торған кеткелдәп көлгән тауышы ауыр саҡтарымда йылмайтһа, шатлыҡлы мәлдәремдә йөрәгемә дәрт өҫтәне.

**Гөлнур ТАЖЕТДИНОВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

*✓ Хәҙерге ваҡытта мәктәп балаларҙы тәрбиәләүсе берҙән-бер "утрау" булып ҡалды. Совет осорон нисек кенә әрләһәк тә, ул система донъяның иң алдынғы уҡытыу-тәрбиә системаһы иҫәпләнә.*



# Уҡытып әллә тәрбиәләп

**Мәғарифта уҡытыу мөһимме, әллә тәрбиә биреүме? Тәрбиә мәсьәләһенә иғтибар итмәйенсә генә уҡытыуҙы беренсе урынға ҡуйыу дөрөҫмө, йәки кирелһенсәме? "Комендант сәғәте" беҙгә кәрәкме, әллә ирекһеҙҙең көнөнән үткәрелгән сарамы? Мәғариф системаһындағы оптималләштереү сараһының төп маҡсаты нимәлә? Бала тәрбиәләүҙә сығымдарҙы ҡыҫҡартыу нимәгә алып киләсәк? Уҡытып тәрбиәләү мөһимме, әллә тәрбиәләп уҡытыумы? Республикала һәм баш ҡалабыҙҙа август кәңәшмәләре башланыр алдынан ошо һәм башҡа һорауҙарға бәйле мәсьәләләр хаҡында Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығының тәрбиә һәм өҫтәмә белем биреү бүлеге начальнигы Мәрүә ҒИЛМЕТДИНОВА, Рәми Ғарипов исемендәге Республика башҡорт гимназия-интернаты директоры Әлфир ҒАЙСИН, Республика иҡтисад лицей-интернаты директоры Юлай СОЛТАНГӘРӘЕВ фекер алыша.**

**▶ Беҙҙә совет мәленән алып хәҙер ҙә уҡытыуҙы һәр саҡ беренсе урынға ҡуялар ҙа, тәрбиә биреүҙе икенсе маҡсат итеп билдәләйҙәр. Хатта "уҡытыу-тәрбиә эше" тигән терминда ла "уҡытыу" һүҙе төп мәғәнә һәлмәклеген үҙенә алған һымаҡ. Әммә төптән уйлағанда шуны ла күрергә була: әгәр ҙә бала ғаиләһендә, мәктәптә тәрбиә алһа, тәрбиәле тип һаналһа, уҡытыуҙа проблемалар аҙ булыр ине һымаҡ. Икенсе һүҙ менән әйткәндә, бала уҡыуҙың зарурлығын үҙе аңлап мәктәпкә килер ине. Ни өсөн беҙҙә мәктәпкә йөрөгән балаға "уҡыусы" тип әйтәләр? Ә ни өсөн, мәҫәлән, "тәрбиәләнеүсе" түгел? Ни өсөн уҡытыусы тәрбиәсе түгел? Хәҙер заман шулай ҡоролған: бала мәктәпкә барамы-юҡмы, мәғлүмәт технологиялары аша үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте былай ҙа таба ала. Шулай түгелме? Был мәсьәләгә ҡарашығыҙ нисек?**

**М. Ғилметдинова:** Мин институтҡа тиклем өлкән пионервожатый булып мәктәптә эшләнем. Институттан һуң мәктәптә директорҙың тәрбиә эше буйынса урынбаҫары булдым. Ул заманда тәрбиә эше барыбер ҙә беренсе урынға ҡуйыла торғайны. Хатта пландарға ла иң тәүҙә дәрестең тәрбиәүи маҡсаты яҙыла ине. Ҡайһылыр арала тәрбиә биреү белем биреү менән алмашынды. Әлбиттә, беҙ балаларға белем биреүҙә күп нәмәгә өлгәштек, беҙҙең балалар урта мәктәпте тамамлағандан һуң донъяның ниндәй генә юғары уҡыу йорттарына уҡырға инмәй, уҡымай! Әйтәйек, совет осоронда был күрһәткес ул тиклем юғары булманы.

Балаларҙы тәрбиәләүҙә кластан тыш үткәрелгән саралар ҙа ҙур роль уйнай. Шундайҙарҙың республика кимәлендә үткәрелгән береһен генә - "Башҡортостан ынйылары"н ғына атап үтәм. Был сарала балалар бер үк ваҡытта Башҡортостандың тарихын, мәҙәниәтен, сәнғәтен өйрәнә, шулар нигеҙендә тәрбиә лә ала. Беҙ был сараны ойоштороуҙы тикшеренеү эштәренән башланыҡ. Был эш сентябрь, октябрь, ноябрь айҙарында үтә, шунан һуң балалар төп геройҙарҙы билдәләй һәм бәләкәй генә сценарий төҙөй. Әйтәйек, былтыр беҙ мәғариф өлкәһендәге шәхестәрҙе өйрәндек. Мин күп йыллыҡ тәжрибәмдән шуны белдем: балалар теге йәки был шәхесте үҙҙәре өйрәнмәһә, тикшеренеү эштәре үткәрмәһә, бары тик уҡытыусы килтергән әҙер материалдарҙы ғына ҡабул итһә, уларҙың күңелендә теге йәки был шәхескә ҡарата мөхәббәт тойғоһо уянмай. Ошоларҙан сығып ҡарағанда, уҡытыу менән тәрбиә эшенең айырылғыһыҙ ғәмәлдәр булғанлығы аңлашыла. Беҙ тәрбиәләп уҡытабыҙ, уҡытып тәрбиәләйбеҙ.

**Ә. Ғайсин:** Тәрбиә эше беренсе урынға ҡуйылырға тейешме, уҡытыу эшеме - быны алдан әйтеп булмайҙыр ул, тием. Гулливер хаҡындағы повеста ике халыҡ араһында "Йомортҡаның ҡайһы яғы осло, ҡайһы яҡтан уны ватырға?" тигән бәхәс нигеҙендә һуғыш башлана. Шуның кеүек, йәғни йомортҡаны һәр урындан ярып булған кеүек, уҡытыу, тәрбиә эштәре бер үк эш ул. Уларҙы айырып ҡарарға ярамайҙыр, тием. Мәҫәлән, бер баланы уҡытып тәрбиәләйһең, икенсеһен тәрбиәләп уҡытаһың. Миҫалға бер ауыл егете беҙҙең интернатҡа килде икән, ти. Ул насарыраҡ уҡый, әйткәнде тыңлай һалып бармай. Әммә ул физик яҡтан көслө һәм мәктәптә лә, ҡалала ла бер кемгә лә бил бирмәҫ көрәшсе. Ул Башҡортостан чемпионы булып киткәс, мин уны саҡырып алам да: "Мин һинең менән ғорурланам, һин беҙҙең мәктәптең генә түгел, милләтебеҙҙең ғорурлығы. Тик бына көндәлегеңде ҡараһаң, Башҡортостан чемпионы булған кешегә былай уҡыу килешмәй бит",- тием. Йәки булмаһа, икенсе бер уҡыу алдынғыһын саҡырып алам да: "Ҡарале, һин бит маладисһың, шәп уҡыйһың, башың эшләй. Тик бына дәрестән һуң дәрәжәнде төшөрөп, тәмәке тартып йөрөйһөң. Уҡыу алдынғыһына килешәме тәмәке тартыу?", - тием. Тәүге осраҡта мин тәрбиәләп уҡытһам, икенсеһендә уҡытып тәрбиәләйем.

Мәрүә Мирсәйет ҡыҙы менән килешәм, ысынлап та, хәҙерге ваҡытта мәктәп балаларҙы тәрбиәләүсе берҙән-бер "утрау" булып ҡалды. Совет осорон нисек кенә әрләһәк тә, ул система донъяның иң алдынғы уҡытыу-тәрбиә системаһы иҫәпләнә. Беҙ әле ул кимәлдән түбән төшөп барабыҙ. Сөнки бер туҡтауһыҙ инновациялар, тәжрибәләр үткәрәбеҙ, һөҙөмтәлә балалар тәрбиә эшенән ситләтелә.

**Ю.Солтангәрәев:** Әлбиттә, үткән быуаттың 90-сы йылдарында мәктәптәрҙә тәрбиә эше ныҡ аҡһай башланы. Быға ике яҡлы идеологик һәм финанс көрсөгө сәбәпсе булды. Беренсенән, илдең ижтимағи ҡоролошо алышыныуы арҡаһында элекке идеология, уның менән бергә балаларҙы тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаусы октябрят, пионер, комсомол ойошмалары юҡҡа сыҡты, икенсенән, уҡытыусыларҙың оҙаҡ ваҡыт эш хаҡы ала алмауы тәрбиә эшендә лә сағылыш тапты.

Тәрбиә менән уҡытыу эшенең сағыштырмаса нисбәтенә килгәндә, тәрбиә эше күберәк уҡытыуҙың йөкмәткеһенә һалына беҙҙә. Быларҙан тыш, кластан тыш эштәр, төрлө түңәрәктәр тәрбиәнең төп нигеҙе була ала. Шул уҡ ваҡытта хеҙмәт тәрбиәһе лә дөйөм тәрбиәнең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып тора.

**▶ Быйыл илебеҙҙә уҡыусы балалар өсөн "комендант сәғәте" индерҙеләр. Белеүебеҙсә, немец фашистары Бөйөк Ватан һуғышында үҙҙәре оккупациялаған территорияларҙа комендант сәғәттәре индергәйнеләр. Был сараның мәжбүри икәнен яҡшы беләбеҙ, шул уҡ ваҡытта уны ваҡытлыса үткәрелгән сара итеп тә күрге килә.**

**М. Ғилметдинова:** Мин "комендант сәғәте"нә бик ыңғай ҡарайым. Беҙ элек ата-әсәләр менән берлектә балаларҙы тәрбиәләй инек. Хәҙер әҙерәк кенә уларҙан ситкәрәк киттек. Һуңғы ун йыл эсендә ата-әсәләр: "Мәктәп беҙҙең балаларҙы тәрбиәләмәй башланы", - тип әйтергә ярата. Киреһенсә, мәктәптең бер ваҡытта ла тәрбиә эшенән ситләшкәне булманы. Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә тәрбиә эше менән шөғөлләнеүсе берҙән-бер "утрау" - мәктәп тороп ҡалды. Илебеҙ бик күп социаль проблемалар солғанышында йәшәй һәм улар тәрбиә эшендә сағылмай ҡалманы, әлбиттә. Әммә был күренеш тә мәктәптең тәрбиә эшенән ситләшкәнен аңлатмай. Тәрбиә эшенән мәктәп түгел, йәмғиәт ситләште. Хәҙер беҙгә ата-әсәнең баланың тәрбиәһе өсөн яуаплылығын арттырыусы закондар ҡабул итергә кәрәк.

**Ә. Ғайсин:** Ата-әсәләр, үкенескә ҡаршы, мәктәпкә "химчистка"ға ҡараған һымаҡ ҡарай. Әйтәйек, бысранған әйберҙе кеше химчисткаға килтереп тапшыра ла, аҡсаһын түләй ҙә, таҙа кейемде алып китә. Ата-әсәләр иһә: "Беҙ бит балаларыбыҙҙы һеҙгә ышанып тапшырҙыҡ, һеҙгә уларҙы тәрбиәләү өсөн аҡса түләйҙәр, ниңә тәрбиәләмәйһегеҙ?" - тигән дәғүәләр ҙә ҡуя. Беҙ был осраҡта яуапһыҙ ҡалабыҙ: сөнки ата-әсәнең үҙ балаһы өсөн яуаплылығы тураһындағы закон юҡ. Тәүлектә - 24 сәғәт. Беҙ көнөнә 6 сәғәт уҡытһаҡ, тәүлектең дүрттән бер өлөшөн генә баланы тәрбиәләүгә һәм уҡытыуға бүлә алабыҙ. Ә ҡалған 18 сәғәт өсөн беҙ бер нисек тә яуап бирә алмайбыҙ. Тимәк, тәрбиә таяғының йыуан осо барыбер ата-әсәләр ҡулында. Был йәһәттән интернаттар башҡа дөйөм белем биреү учреждениеларына ҡарағанда отошлораҡ позицияла. Мин быға тиклем ауыл мәктәбендә ябай уҡытыусы булып та, завуч булып та, директор булып та эшләнем һәм интернатта йәшәүсе балаларҙың тәрбиә йәһәтенән тотороҡло икәненә тәрән инандым. Әйтәйек, мин уҡыусыға тәрбиә биреү маҡсатында бер фәһемле нәмә әйттем икән, ти. Бала өйөнә ҡайта ла, минең әйткәнде атаһына йә әсәһенә әйтә. Ә инде үҙ балаһын күп осраҡта хаҡлы тип һанаған ата-әсә минең әйткәнгә үҙ дәғүәһен белдерә һәм баланың күңеленә икеләнеү тойғоһо инеп урынлаша, йәғни минең тәрбиә эшем юҡҡа сыға. Ә инде интернатта беҙ балалар менән тәүлек әйләнәһенә бергә һәм улар менән йүнәлешле эшләй алабыҙ.

"Комендант сәғәте"нә килгәндә, балаларҙың киске сәғәттәрҙәге режимына бәйле мәжбүри сара ул. Беҙ уны үҙ-ара ғына образлы итеп "комендант сәғәте" тип атап йөрөтәбеҙ. Әммә был сара беҙгә кәрәк.

**М. Ғилметдинова:** "Комендант сәғәте" тип халыҡ телендә генә атап йөрөтөлә. Ысынында иһә, ул балаларҙың киске 22.00 сәғәттән һуңғы режимын көйләү маҡсатынан сығып индерелде. Ата-әсәләрҙең үҙ балаларына ҡарата яуаплылығын арттырыу өсөн дә кәрәк был. Нисек килеп сығыр, һөҙөмтәләр күрһәтер.

**Ә. Ғайсин:** Беҙ ауылда үҫтек һәм беҙ үҫкән саҡта ата-әсәләр балаларының ҡасан ҡайтыуын да, соландамы, аласыҡтамы, әүеҫлектәме йоҡлағанын да белмәне. Белмәне, шул уҡ ваҡытта уларҙың балалары тәртип тә боҙоп йөрөмәне. Минеңсә, "комендант сәғәте" күберәген ҡала балалары өсөн кәрәктер.

**Ю.Солтангәрәев:** Беҙҙең учреждениела киске сәғәт 8-ҙә үк "комендант сәғәте" башлана. Кем дәрес әҙерләй, кем иртәгәһе көнгә кейемен әҙерләй - былар барыһы ла шул ваҡытта атҡарыла. "Комендант сәғәте" кәрәктер, тием, сөнки статистика буйынса енәйәттәрҙең иң ҙур өлөшө киске энерҙә, төн уртаһында башҡарыла. Шуға күрә балаларҙы ул донъянан ҡурсалау өсөн был закон бик урынлы ҡабул ителгән, тип иҫәпләйем. Икенсенән, был законды ҡабул итеү - мәжбүри саралыр, сөнки беҙҙең ата-әсәләр объектив һәм субъектив сәбәптәр арҡаһында балаларын тәрбиәләүҙән ситтә тора. Объектив сәбәптәрҙең иң мөһиме - социаль сәбәптәр. Һәр бер ата-әсә күп ваҡытын ғаиләһен ҡарау өсөн ҡайҙандыр ниндәйҙер юл менән аҡса табыуға арнай. Хатта бер нисә урында параллель рәүештә эшләп йөрөүсе, ипотека, кредит "һаҙлығына" ултырыусылар ҙа бихисап.

**▶ "Комендант сәғәте"н үҫмерҙең үҙ йәшенә ҡарата серлеккә, мөғжизәгә ынтылыу юҫығында ҡабул итеп булмай. Кешенең ғүмерендә бер генә тапҡыр булған тәүге мөхәббәт романтикаһы ла ҡараңғылыҡта тәүге тапҡыр һөйөү һүҙҙәрен әйтеүгә бәйле. Серлелек - ул ҡараңғылыҡ. Шулай ҙа "комендант сәғәте" күберәк ҡала балалары өсөн кәрәктер, тием. Бына, Әлфир Сулпан улы, Юлай Салауат улы, һеҙҙең уҡыу йорттарында асылда ауылдан килгән балалар уҡый...**

**Ю.Солтангәрәев:** Беҙгә ауылдан яңы килеүсе балалар тәүҙә бер-ике ай шаңҡып йөрөй, адаптация осоро үтә. Шунан ҡалаға сығып йөрөй башлаһа, сит йоғонтоға бирелә башлай. Беҙҙә бер мәл егеттәр ҡолаҡтарын тишеп, алҡа таға башланы. Уларға байтаҡ ҡына аңлатырға тура килде.

**Ә. Ғайсин:** Беҙҙә лә бер егет алҡа таға башланы. Уны линейка алдына сығарҙым да: "Беләһеңме, ҡыҙҙар ни өсөн алҡа таға? Улар бының менән егеттәрҙең үҙенә иғтибар итеүен теләй. Ә һин кемдән иғтибар көтәһең? Ҡыҙҙар алҡаға алданмай", - тинем. Шундуҡ сисеп ырғытты һәм шунан һуң бер егет тә уның ҡылығын ҡабатламаны.

**М. Ғилметдинова:** Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, хәҙер ауылда ҡала менән сағыштырғанда балалар менән проблемалар күберәк була башланы. Былар барыһы ла ата-әсәләрҙең үҙ балаларына артыҡ ышанып ҡарауынан һәм уларға артыҡ үҙаллылыҡ биреүенән дә килә. Ауылдың тәрбиә йөҙө ныҡ үҙгәрҙе, ҡала проблемалары проблема булып туҡ-

*Мин күп йыллыҡ тәжрибәмдән шуны белдем: балалар теге йәки был шәхесте үҙҙәре өйрәнмәһә, тикшеренеү эштәре үткәрмәһә, бары тик уҡытыусы килтергән әҙер материалдарҙы ғына ҡабул итһә, уларҙың күңелендә теге йәки был шәхескә ҡарата мөхәббәт тойғоһо уянмай. Ошоларҙан сығып ҡарағанда, уҡытыу менән тәрбиә эшенең айырылғыһыҙ ғәмәлдәр булғанлығы аңлашыла. Беҙ тәрбиәләп уҡытабыҙ, уҡытып тәрбиәләйбеҙ.*

***✓ Беҙ ауылда үҫтек һәм беҙ үҫкән саҡта ата-әсәләр балаларының ҡасан ҡайтыуын да, соландамы, аласыҡтамы йоҡлағанын да белмәне. Белмәне, шул уҡ ваҡытта уларҙың балалары тәртип тә боҙоп йөрөмәне.***

# ТӘРБИӘЛӘЙЕКМЕ, уҡытайыҡмы?

таған ерҙә, шул уҡ проблемалар ауылға көсте.

**Рәсәй Федерацияһы мәғариф системаһында хәҙерге ваҡытта оптималләштереү сәйәсәте тормошҡа ашырыла башланы. Оптималләштереү башланып та өлгөрмәне, беҙ уның тәүге кире һөҙөмтәләрен дә татып өлгөрҙөк. Һеҙҙең мөнәсәбәтегеҙ нисек?**

**Ә. Ғайсин:** Оптималләштереү һөҙөмтәһендә күп кенә белем биреү учреждениеларында түңәрәктәр ябылып бөттө. Түләнмәгән хеҙмәттең мәғәнәһе лә шул тиклем, был - аксиома. Ярар, беҙ, интернаттар, айырымыраҡ финанслауға ҡарағас, түңәрәктәрҙең күбеһен һаҡлай алдыҡ. Ә муниципаль кимәлдәге ауыл-ҡала мәктәптәре бөтөнләй факультативһыҙ һәм түңәрәкһеҙ, секцияһыҙ тороп ҡалды. Белеүебеҙсә, белем биреү йөгө предмет дәрестәренә, ә тәрбиә йөгө тап шундай кластан тыш сараларға күберәк һалынған.

Мәҫәлән, бер балаға йылына 60 мең һум бүленде икән, ти. Ә беҙгә был баланы 15 меңгә уҡытырға ҡушалар, йәғни ҡалған 45 меңде ҡаҙна беҙгә бүлмәй. Әммә дәүләт ҡалған 45 меңде барыбер түләп ҡуясаҡ: йә төрмәгә эләккән шул үҫмерҙе аҫырар өсөн түләйәсәк йә булмаһа ул сумманы бәләгә йә ҡазаға эләккән бала үҙе кемгәлер түләргә мәжбүр буласаҡ. Бының менән нимә әйткем килә һуң: ул аҡса барыбер түләнәсәк, ә бит уны баланы яҡшы шәхес итеп тәрбиәләүгә һалһаң, ил өсөн күпкә отошлораҡ булыр ине. Баланы тәрбиәләү өсөн тотонолмаған аҡса уны төҙәтеү өсөн күпкә арттырылып барыбер сарыф ителәсәк. Был - диалектика законы. Донъяла кеше капиталы тигән төшөнсә бар. Һин аҡсаңды банкҡа һалаһыңмы, бала тәрбиәләүгә тотонаһыңмы - бала тәрбиәләүгә һалғанда 25-30 тапҡырға отаһың. Быны донъяның иң алдынғы ҡарашлы иҡтисадсылары иҫәпләп сығарған. Утынды яҡҡанда ул ҡояштан күпме йылы алған, шул тиклем йылы бирә икән. Шуның кеүек, баланы тәрбиәләгәндә күпме һалаһың, һөҙөмтә һалғаныңа ҡарап буласаҡ. "Ни сәсһәң - шуны урыһың", тиелә халыҡ мәҡәлендә.

**М. Ғилметдинова:** Беҙҙең мәғарифта белем кимәленең критерийы бар, тәрбиәлелектеке - юҡ. Беҙ унда критерийҙы кеше ғүмеренең аҙағында ғына "Өлгөлө олатай", "Өлгөлө өләсәй"тип кенә ҡуя алыр инек. Ә белем кимәленең критерийҙары бар: урта мәктәпте тамамлау имтиханы, Берҙәм дәүләт имтиханы, юғары уҡыу йортона һынау, һ.б. Әгәр ҙә бала вундеркинд булып та, урамда ололар менән иҫәнләшә белмәй, ата-әсәһен һанға һуҡмай икән, уның вундеркиндлығы һуҡыр бер тингә лә тормай. Тимәк, беҙ беренсе урынға тәрбиә биреүҙе ҡуймаһаҡ, кеше булараҡ юҡҡа сығып, йәнһеҙ роботтарға, маңҡорттарға әүерелеп бөтәсәкбеҙ. Элек яҡшы уҡыған, уртаса уҡыған, насар уҡыған уҡыусылар бар ине мәктәптә. Хәҙер иһә балалар йә үтә һәләтле, йә үтә насар уҡый. Был нимә тураһында һөйләй: беҙ белем биреүҙе генә беренсе урынға ҡуйып, тәрбиә биреүҙе бөтөнләй онотторк. Тимәк, тәрбиә биреү барыбер беренсе урынға ҡуйылырға тейеш. Әгәр бала тәрбиәле түгел икән, уның алған белеме нимәгә, кемгә кәрәк? Тәрбиәһеҙлеген үҫтереү өсөнмө? Беҙ шуны ла беләбеҙ: белемде үҙенде, йәмғиәтте, милләтте үҫтереү өсөн дә, емереү өсөн дә, яуызлыҡты арттырыу өсөн дә файҙаланып була. Мин был осраҡта һәр ваҡыт Мәрйәм Бураҡаева менән Миңлебай Юлмөхәмәтовтың "Тормош һабаҡтары" китабын миҫал итеп килтерәм. Әле беҙ Башҡортостан мәғариф учреждениелары, мәктәптәр өсөн "Уҡытыу-тәрбиә эше" тигән дисциплина эшләй башланыҡ һәм унда "Тормош һабаҡтары" дәреслеге беҙҙең төп ярҙамсыбыҙ булып тора. Ул китаптың һәр бер бите, һәр бер һөйләме, һүҙе, һүрәте тәрбиә менән һуғарылған. "Тормош һабаҡтары" һәр бер уҡытыусыға, һәр бер тәрбиәсегә өҫтәл китабы булырлыҡ әсбап. Әле алдағы йылдың яңы уҡыу йылынан "Яңы стандарттар"ҙы индерергә тура киләсәк. Унда "Дәрестән тыш эшмәкәрлек" тигән пункт бар. Әлеге тәрбиә эштәрен тап шунда индереп буласаҡ. Тик шуныһы: был пункттар тағы ла финанс менән нығытылмаған. Шуға күрә лә быйыл 1 сентябрҙән элеккесә эшләргә тура киләсәк.

***Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә тәрбиә эше менән шөғөлләнеүсе берҙән-бер "утрау" - мәктәп тороп ҡалды. Илебеҙ бик күп социаль проблемалар солғанышында йәшәй һәм улар тәрбиә эшендә сағылмай ҡалманы, әлбиттә. Әммә был күренеш тә мәктәптең тәрбиә эшенән ситләшкәнен аңлатмай. Тәрбиә эшенән мәктәп түгел, йәмғиәт ситләште. Хәҙер беҙгә ата-әсәнең баланың тәрбиәһе өсөн яуаплылығын арттырыусы закондар ҡабул итергә кәрәк.***

**Ә. Ғайсин:** Беҙҙең республикала әле мәғариф системаһы тотороҡло режимда эшләй. Шөкөр, тип әйтергә була. Бында республикабыҙ Хөкүмәтенең дә роле ҙур. Тәжрибә уртаҡлашырға күп йөрөргә тура килә: хәлдәр үтә мөшкөл булған төбәктәр бар Рәсәйҙә. Адреслап әйтмәйем, дүрт йыл бер өлкәгә барғанда иртәнсәк мәктәпкә инеүебеҙ булды, ут һүнде лә ҡуйҙы. Ҡап-ҡараңғы, стеналарҙы тотоп тоҫмаллап киттек мәктәп буйлап. Директорҙың бүлмәһенә барып индек, ул майшәм менән генә ултыра. Баҡтиһәң, район электр өсөн бурыслы, шуға һүндерәләр икән. Әҙерәк кенә яҡтырғас, кластар буйынса киттек. Балалар кәпәс, пальто кейеп уҡый, ҡулдарына яҙырға уңайлы булһын өсөн тип бармаҡтары ҡырҡып ташланған бирсәткә кейгәндәр. Баҡтиһәң, ике йыл мәктәп бөтөнләй йылытылмай икән. Дәрестәр 20-шәр минут. Әгәр ҙә беҙҙә ошо хәл булһа, барлыҡ Рәсәйгә "Ғәҙәттән тыш хәл" тип иғлан итерҙәр ине. Беҙҙә иһә ундай хәлдәр 60-70-се йылдарҙа ғына күҙәтелгәндер.

**Мәрүә Мирсәйет ҡыҙы "беҙҙә тәрбиәлелекте билдәләй торған критерийҙар юҡ", тип әйтте. Бына Германияла, мәҫәлән, ундай критерий бар. Бала донъяға тыуып, уҡып сығып, һөнәр алып кеше булғансы ата-әсә уға киткән барлыҡ сығымдарҙы яҙып бара. Һуңынан бала шул сығымдарҙағы сумманы ата-әсәһенә кире ҡайтарып бирергә бурыслы. Улай ғына ла түгел, ул бала һуңынан ҡайҙалыр эшкә урынлашҡанда, карьера баҫҡысы буйлап үрләтелгәндә уның ниндәй кеше икәнлеген ошо "бурысты" түләү-түләмәүенә ҡарап билдәләйҙәр. Ата-әсәһенә бурысын түләгән кеше ышаныслы, маҡсатлы кеше тип иҫәпләнә. Беҙҙә иһә ата-әсәләр балаға бер туҡтауһыҙ аҡса түгә, хатта пенсияға сыҡҡас, пенсияһын да бирә.**

**М. Ғилметдинова:** Германияла, Голландияла мәғариф системаһы өс баҫҡысҡа бүленә. 1-се баҫҡысты федераль кимәлдәге лицей-гимназиялар тәшкил итә һәм унда һәләтле балалар белем ала, 2-се баҫҡыста уртаса уҡыған балалар, 3-сө баҫҡыста үҙ ғаиләһендә насар тәрбиә алған, уҡыу планын ауыр үҙләштергән балалар уҡый. Мине унда нимә аптыратты. Социаль-реабилитация үҙәгендә кәмендә бер юлы йөҙ кеше булырға тейеш, тип ҡарайбыҙ. Ә уларҙа матур бинала 5 педагог, психолог ултыра һәм улар үҙәккә көнөнә бер бала килеүенә лә риза. Улар өсөн һан түгел, сифат мөһимерәк. Уларҙың 3-сө баҫҡыс мәктәбенә лә индек. Бер класта 10 бала һәм 3 уҡытыусы ултыра. Ҡайһы бала ниндәй предмет буйынса шөғөлләнгеһе килһә, шул уҡытыусы янына бара, йәғни уларҙа дәрес регламенты ҡуйылмаған. 3-сө баҫҡыс мәктәбен муниципаль власть финанс менән тәьмин итә, тәүгеләре федераль ҡаҙнаға ҡарай.

**Ә. Ғайсин:** Шул уҡ системаны хәҙер беҙгә лә индерергә итәләр. Дөрөҫ түгел. Былар барыһы ла оптималләштереү һылтауы менән сығымдарҙы минималь кимәлгә ҡалдырыу өсөн башҡарыла. Нисек килеп сыға инде? Мин, мәҫәлән, иртәнсәк мәктәпкә китергә йыйынған балама юл йөрөргә кәрәкле 40-50 һум урынына 10 һум ғына тотторам да, уға шулай тип әйтергә тейеш булам: "Бына һиңә, улым, 10 һум аҡса, бүтән бирә алмайым. Ҡалғанын теләһә ни эшлә..." Сөнки хәҙерге ваҡытта совет осоро системаһы буйынса белем алған белгестәр донъя кимәлендә бик юғары баһалана һәм, дөрөҫөн әйткәндә, капитал донъяһы уларға "һунар" ойоштора.

**М. Ғилметдинова:** "Балалар - беҙҙең киләсәк", тибеҙ. Был юғары һүҙҙәр түгел, ысынлап та, шулай. Иҡтисадты балалар тәрбиәләүҙе ҡыҫҡартыу юлы менән күтәреп булмай. Иҡтисад - ул беҙҙең балаларыбыҙ. 20-30-сы йылдарҙа балаларға өҫтәмә белем биреү өсөн пионерҙар йорттары төҙөгәндәр. Уларҙа йәш техниктар станциялары, натуралистар, йәш туристар, спортсылар, бейеү түңәрәктәре эшләне. Балалар уларҙа бушлай шөғөлләнде. Бөгөн иһә бындай учреждениеларҙы автономлыға әйләндереп яталар. Автономлы нисек була: балалар унда йөрөгән өсөн түләргә тейеш булалар. Һуң, балалар тәрбиәләнгән урында ниндәй аҡса эшләүе тураһында һүҙ барыуы мөмкин һуң? Бөгөн Рәсәй Федерацияһы халҡының 77 проценты бындай хеҙмәттәр өсөн түләй алмай.

**Ю.Солтангәрәев:** Балаларға ни тиклем күберәк һалһаң, беҙ уларҙан шул тиклем күберәк аласаҡбыҙ.

**Һеҙ үҙ ғаиләгеҙҙә тәрбиәләнгәндә ата-әсәйегеҙҙең тик үҙҙәренә генә хас ниндәй тәрбиә алымдары булды?**

**Ә. Ғайсин:** Беҙҙең атай балалар йортонда үҫкән, тәрбиәләнгән, уҡыған. Үҙе дәүләт эшендә булғас, беҙ биш бала уны күрмәй ҙә инек. Ул иртәнсәк сығып киткәндә лә, кис ҡайтҡан сағында ла беҙ йоҡлаған була инек. Уның менән аралашмаһаҡ та, беҙ уны иң көслө, аҡыллы идеаль атай итеп тойҙоҡ. Уға ҡарау, үҙе менән һөйләшеү өсөн генә лә үҙ-ара көрәшә инек. Әсәй ҙә күберәк эштә булды. Беҙ бишәүләп мәктәпкә китә торғайныҡ. Атайыбыҙҙы ныҡ яраттыҡ, унан иркәләнеү өсөн генә лә тырышып уҡый торғайныҡ. Беҙҙе атайыбыҙҙың үҙенән бигерәк образы тәрбиәләне, тиһәк тә була инде. Ул беҙҙе: "Шулай эшләргә кәрәк, былай ярамай", - тип тәрбиәләмәне. Үҙенең булыуы, образы менән беҙҙе тәрбиәләне.

**Ю.Солтангәрәев:** Мин 2002 йылда Стәрлетамаҡ педагогия институтын тамамланым. Беҙҙең төркөмдә тәүҙә 22 кеше булып, V курсҡа 12 кеше килеп етте. Әлеге ваҡытта шуларҙан тик бер мин генә уҡытыусы булып эшләйем. Атайым бер ваҡытта ла тауыш күтәреп әрләмәне, эш боҙһаң, саҡырып алып, матур итеп кенә аңлатты.

**М. Ғилметдинова:** Атайым да, әсәйем дә йәшерәк ваҡытта вафат булдылар. Тәүҙә әсәйем үлгәс, атайым үгәй әсәйгә өйләнде. Ул үлеп ҡалғас, беҙ үгәй әсәйгә ҡайтып йөрөйбөҙ. Үгәй әсәйҙең балалары менән беҙ бөтәбеҙ ете балабыҙ, ул беҙгә тигеҙ ҡарай һәм бер ваҡытта ла балаларҙы үҙенекенә һәм башҡаларға бүлмәй. Бының менән нимә әйтергә теләйем: балаға тейешле һәм дөрөҫ мөнәсәбәт булғанда хатта төрлө ата-әсәләрҙең балалары ла бер ғаиләлә, бер синыфта, бер ауылда, бер илдә һыйышып йәшәй ала.



**Шулай итеп…**

**Беҙ был һөйләшеүҙә уҡытыу менән тәрбиәне нисек кенә айырырға тырышһаҡ та, барыбер ҙә уларҙың берҙәмлеге булғанда ғына үҫеп килгән йәш быуынды дөрөҫ итеп тәрбиәләп булғанлығын аңланыҡ. Юҡҡа ғына был процесты уҡытыу-тәрбиә эше тип атамағандарҙыр инде. Беҙ тәрбиәләп уҡытабыҙ, уҡытып тәрбиәләйбеҙ. Бары тик уҡытыу менән тәрбиә араһында айырма ғына булмаһын. Һүҙ менән эш араһындағы айырма кеүек.**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

***✓ Ошо һүҙҙәр менән Резеда ҡая ситенә килеп баҫты. Аҫта йылға. Резеданың ниндәй аҙым яһарға ниәтләгәнен белмәй ул, тыныс ҡына ағыуын белә. Хәҙер ошо тынлыҡ боҙоласаҡ, тирә-яҡ һиҫкәнәсәк.***






Резеда инеп карауатына тәгәрәне лә буҫығып-буҫығып иланы. Күптән былай илағаны юҡ ине, күҙ йәштәре кибеп бөткәйне бит инде. Яҙмышына күнеп, хис-тойғолары һүнеп, тимер ҡатынға әйләнгәйне... Илһам... һин үлһәң дә мине ғәфү итмәҫһең инде. Барыһынан да бигерәк бына ошо уйҙар йөрәген һыҙлатты Резеданың. Мин бит уны бәхетһеҙ иттем! Мәңгелек ғазаптарға һалдым, йөрәген яраланым. Яралы йөрәк менән йәшәүҙең нисек икәнен Резеданан да яҡшыраҡ аңлаған кеше бармы икән? Был тормошта ул яҡшы күңелле кешеләр менән бергә тиң ғүмер итә алмай, шуны төшөндө Резеда. Ул әргә-тирәһендәгеләргә тик бәхетһеҙлек кенә килтерә. Ялҡты ул барыһынан да! Бер көн дә торғоһо килмәй!

Былай илап ятып булмай, тиҙерәк сығып китергә кәрәк был йорттан. Илһам ҡайтмаҫ борон... Юҡһа... ҡыйын буласаҡ Резедаға. Сумкаһын һөйрәп залға сыҡҡанында Миңзифа менән Динә ишек төбөндә торалар ине.

- Нимә аҡайышып ҡарап ҡаттығыҙ?! - тип, бер аҙ тынысланған Резеда әхирәте менән ҡәйнәһенә ҡарамай ғына кухняға уҙҙы. Миңзифа аяҡ осонда ғына уның артынан эйәрҙе. Инмәне үҙе, ишек ситенән генә эскә үрелеп ҡараны. Шунда уҡ, ҡорт саҡҡандай, Динә янына әйләнеп килде: "Бысаҡ алды, тәүбәкәйем!" Ни эшләргә лә, ни уйларға ла белмәне үҙе. Уның ҡапыл ғына хәле бөттө, теҙҙәре ҡалтырарға тотондо. Динә хәлдең ҡайҙа табан барыуын күҙ алдына килтереп, аш-һыу бүлмәһенә ашыҡты.

- Резеда, туҡта!

Әммә шул ваҡыт Резеда бысаҡ тотҡан килеш әйләнеп баҫты:

- Ялҡыттығыҙ! Китегеҙ янымдан! Ҡамасауламағыҙ, юҡһа... - тип ыҫылданы. Динәгә ситкә ялтаныуҙан башҡа әмәл ҡалманы.

- Аҡылдан шашҡан был... - Миңзифаның бар белгән һүҙе шул ғына булды.

Резеда урам буйына атылды.

- Әҙәмдән оят! - тип ғәрләгенән һығылып төштө Миңзифа. - Был Илһамы ҡайҙа йөрөй икән?!.

Резеда тау яғына ашыҡты. Тиҙерәк, тиҙерәк урман араһына инеп, кеше күҙенән йәшеренергә! Әлегә ҡайҙа барырын аныҡ ҡына белмәй ине, уны мөһим тип тә һанаманы, ҡәйнәһе йортонан ысҡына алғас, бик шәп. Сумкаһына абына-һөрөнә тауға үрмәләне. Үләнгә, селек ҡыуаҡтарына ҡулдарының һыҙырылыуын да тоймай, атланы ла атланы. Һәм башына зәһәр уй килде: хәҙер, хәҙер барыһы ла бөтәсәк. Илһам да, ҡәйнәһе лә, Динә лә, ата-әсәһе лә ғәрлектән ҡотоласаҡ. Менеп кенә етергә кәрәк. Тау башына дүрт аяҡлап тигәндәй менеп етте лә йығылды. Ерҙе ҡосаҡлаған килеш хәрәкәтһеҙ ҡалды. Күҙ алдынан бала сағы - Динә менән һыу инергә, еләккә йөрөгән, уйнаған, бергәләп уҡырға йөрөгән мәлдәре йыбырлап уҙҙы. Әсәһе, атаһының шелтәле йөҙҙәрен күрҙе. Класташтарын, ауылдаштарын, дуҫиштәрен - һәр береһен айырым-айырым барлап сыҡты. Һәр береһе элекке кеүек кенә һаҡланып ҡалған уның хәтерендә. Барыһын да иҫенә төшөргәс, уға рәхәт булып китте, эсенә йылы йүгерҙе. Туҙған сәстәрен бер аҙ рәтләштереп, үҙен ипкә килтереп, тороп баҫты. Бынан бар ауыл ус төбөндәгеләй генә күренә. Ана ул килен булып төшкән йорт. Хәҙер ни эшләйҙәр икән? Илһам ҡайтҡандыр инде. Моғайын, мал ҡайтҡансы тип, сәй эсәләрҙер. Сәй артында Резеданы һөйләп көләләрҙер. Бәлки, әрләйҙәрҙер... Сығып китеүенә һөйөнәләрҙер... Ана, Ынйыбикә апайҙарының өйө. Ҡәһәрле өй. Тыштан ғына ялтырап ултыра, ә эсендә күпме бәхетһеҙлек... Барыһы ла бөттө!.. Ошо һүҙҙәр менән Резеда ҡая ситенә килеп баҫты. Аҫта йылға. Резеданың ниндәй аҙым яһарға ниәтләгәнен белмәй ул, тыныс ҡына ағыуын белә. Хәҙер ошо тынлыҡ боҙоласаҡ, тирә-яҡ һиҫкәнәсәк, бар тирә-яҡ әҙәмдең сәйер ҡылығына аптыраясаҡ... Резеда күҙҙәрен йомдо. Һуңғы тапҡыр Илһамының асыҡ, мөләйем йөҙө күҙ алдына баҫты. Уйында ғына һөйгәненең сәсенән һыйпап иркәләне, маңлайынан, күҙҙәренән үпте. Инде китергә лә була... Һикерҙем генә тигәндә ҡылт итеп иҫенә Сәйет килеп төштө. Ә ул? Һыуҙан ҡоро сығырмы? Енәйәт ҡылыуҙарын, бер ғәйепһеҙ кешеләрҙе ҡайғы-хәсрәткә ҡалыуҙарын дауам итерме? Резеда, ирекһеҙҙән, өйҙән һалып алып сыҡҡан бысағын ҡапшап ҡуйҙы: ниңә был ҡоралдың файҙаһын күрмәҫкә?

Халыҡтың мал-тыуарын барлап бөтөүен саҡ көтөп алды Резеда. Кеше аяғы һил булғас, төнгө урмандың һәр шылҡ иткән тауышын тыңлай-тыңлай ауыл яғына ыңғайланы.

Сәйет уны көтә ине. Сумка күтәреп килеп инеүен күргәс, ҡыуанысынан ауыҙы йырылды.

- Килдеңме шулай ҙа? Кәнишнә! Минһеҙ кем һин? Минең арҡала ғына кеше булып йөрөйһөң бит һин!.. - тип һөйләнә-һөйләнә ҡосаҡларға ынтылды. Бөгөн ул элекке Сәйеткә оҡшап ҡалғайны: таҙа кейемдәр кейгән, ҡырынған, сәсе лә шыма ғына. Хатта одеколон да һиптереп алған булған. Кисә, күрәһең, мунса төшә алған шулай ҙа. Ҡәйнәһе яҡҡандыр...

- Кил әле бер ҡосаҡлайым үҙеңде. Һағынып бөттөм бит юҡһа...

Резеда уны йән асыуына этеп ебәрҙе.

- Ҡағылма миңә! Мин бында һинең менән иркәләнеп ултырырға килмәнем... - тип тамаҡ төбө менән ғыжылданы.

- Һин нимә?! Кем менән һөйләшкәнеңде оноттоңмо? - Сәйеткә, әлбиттә, Резеданың үҙен шулай иркен тотоуы, унан да бигерәк ҡаршы өндәшеүе һис кенә лә оҡшаманы, күҙҙәрен аҡайтып, ҡатындың сәсенән урап тотоп алды. - Күрһәтәм мин һиңә хәҙер нисек иркәләнеүҙе.

- Ебәр!.. - Резеда нәфрәт менән өндәште. Элек булһа, бүренән ҡурҡҡан һарыҡ бәрәсе кеүек, нимә эшләргә белмәҫ ине, әле иһә тамсы ла ҡурҡыу тойманы. Быны Сәйет тә һиҙҙе.

- Ах, кәнтәй! Телең асылдымы әллә? Яҡшы итеп өндәшкәнде аңламай башланыңмы? Икенсе төрлө һөйләшербеҙ улай булғас! - Үҙе Резеданың сәсен ҡулына тағы ла нығыраҡ ураны.

- Мин дә һинең менән икенсе төрлө һөйләшергә тип килдем! Ебәр сәсте!

Ни ғиллә менәндер был юлы Сәйет уға буйһонодо, Резеданың сәсен ысҡындырҙы ла, үҙен төпкә этеп индерҙе.

- Йә, улай телең асылғас, һөйлә. Минең хәҙер ваҡытым күп, тыңлайым... - Үҙе мыҫҡыллы йылмайып диванға ҡырын төшөп ятты.

- Һин - ҡанэскес!

- Шуны әйтер өсөн ашҡынып килдеңме шулай? - тип хихылданы Сәйет. - Уны мин һинһеҙ ҙә беләм...

- Һин - эт! Күпме кешегә бәхетһеҙлек килтерҙең, күҙ йәштәрен түктерҙең!..

- Шунан? - Сәйет тыныс ҡына тыңлауын белде.

- Мине кешелектән сығарҙың. Күрә алмайым мин һине! Ишетәһеңме, күрә алмайым!

- Бөттөмө? Ә хәҙер мине тыңла! Нимә генә лығырлап торһаң да, бел - минән барыбер ҡотола алмаясаҡһың! Һин - минеке генә!

Сәйет тороп, Резедаға ынтылды. Ҡатын тейен етеҙлеге менән йоҡа курткаһы кеҫәһенән бысаҡ килтереп сығарҙы.

- Яҡынлайһы булма! Бына һинең дә бөтә гонаһтарың өсөн яуап бирер ваҡытың етте, эт!

Сәйет бер аҙға албырғап ҡалды. Кемдән-кемдән, Резеданан быңдай аҙымды көтмәгәйне ул.

- Һин нимә?! - тип ни асыуланырға, ни көлөргә белмәй торҙо бер килке. Унан: - Йә ярай, шаярҙың, етте, бысаҡ һиңә уйынсыҡ түгел, - тип бысағын тартып алмаҡсы булды. Резеда ла аптырап торманы, йән асыуына Сәйеткә ташланды:

- Етер һиңә кеше ҡаны эсеү! Теге ваҡыт милицияға ышанып хата эшләнем, ғәзеллекте үҙемә генә атҡарырға кәрәк булған!

Әммә ир күпкә йылғырыраҡ та, көслөрәк тә ине: ялтанып ҡалды, шул ыңғайҙан Резеданың ҡулынан эләктереп өлгөрҙө. Ҡулы шаҡарылыуға түҙә алмай, ҡатынҡай ҡулдарын бушатты, бысағы иҙәнгә төшөп китте.

- Һин шулаймы әле! Һиҙә-ә-ә инем кемдең эше икәнен, ышанғым килмәгәйне... Ҡуйынымда йылан йылытып ятҡанмын икән!... - тип ҡатлы-ҡатлы һүгенеп, ирекәй уға һуғып ебәрҙе.

Тәкмәсләп барып төшһә лә, ауыртыу тойманы Резеда. Көсһөҙлөгө өсөн ғәрлек алҡымынан алды уның. Шулай уҡ яңынан килеп ҡаптымы ни ҡапҡанға?

- Иртәгә таң менән юлға сығабыҙ! Беҙҙең арттан киләсәктәр, үҙеңде тәртипкә килтер, - тине лә, Резеданы өҫкө ҡатҡа һөйрәп мендереп, йоҡо бүлмәһенә төртөп индерҙе, тыштан ишекте бикләп ҡуйҙы.

- Тауыш-тының сығып ҡына ҡараһын! - тип янарға ла онотманы.

Резеда күҙ йәштәренә быуылып, һығылып төштө. "Иҫәрмен дә инде!" - тип үҙен тиргәне. Әҙмәүерҙәй ирҙе еңел генә итеп үлтерергә теләне!

Резеда Илһам менән тәүге төндәрен үткәргән карауатҡа барып ятты. "Бына шулай... ошонда башланғайны уның бәхете, ошонда тамамлана ла..." - һүрән генә йылмайып, яҫтыҡты һыйпаны. Нисәмә көн үтеп китһә лә, танауына Илһамының еҫе килеп бәрелгәндәй булды. Ул ни эшләй икән? Резеда Сәйетте үлтерергә әҙер булған кеүек, ул да Резеданы үлтерер хәлдә йөрөйҙөр инде. Был эттең ҡулынан үлгәнсе, рәхәтләнеп Илһам ҡулынан йән бирер ине ул...

Тышта ҡараңғы. Ҡая менән ҡайын барыһын да күҙәтеп торалыр инде... Хуплаймы улар Резеданы? Йәлләйме? Иҫәр, тип көләме? Ниңә генә мине ҡайынға иш итеп, үҙ ҡосағына алманы икән был ҡая?.. Хәйер, Резеда үҙе ғәҙеллек булдырырға теләгәйне бит... Бер аҙҙан ҡатын тәнендә еңеллек тойҙо, тынысланды, ҡайҙалыр осоп киткәндәй тойҙо. Әүен баҙарына осҡайны ул.

Кемдеңдер һаҡ ҡына сәсенән һыйпауына уянып китте. Сәйет, тип ытырғанды йоҡо аралаш ҡатынҡай, шулай ҙа һиҙмәгәнгә һалышып ята бирҙе. Ваҡытты һуҙырға теләне бисара, ҡайҙалыр йәне һөймәгән кешегә эйәреп сығып китеһе, бар мәхшәрҙе өр-яңынан башлағыһы килмәне. Бая һикерәм тигән сағында туҡтап ҡалмаған булһасы!

- Резеда, тор, - тип бышылданы тауыш. - Мин һине алырға килдем...

Бәй... Илһам түгелме һуң был? Ул бында нимә ҡарай? Резеда башын ҡалҡытты. Ғәйепле бала шикелле башын түбән эйгән килеш карауат ситендә ысынлап та уның Илһамы ултыра. Ҡаштары төйнәлгән, ҡарашы уйсан, етди. Резеда ҡорт саҡҡандай ҡапыл һикереп тороп ултырҙы.

- Илһам, үтенәм, тиҙерәк сығып китә һал бынан! Теге эт килеп инһә, үлтерәсәк! Зинһар! - тип ялбарҙы. Үҙе иренә яҡынларға, ҡулдарына ҡағылырға бик теләһә лә, ҡыйманы. Илһам уға йәлләп ҡараны - шул тиклем дә меҫкен хәлендә ине ул. Сәсе-башы туҙған, биттәре күп илауҙан шешмәкләнгән, кейеме лә... ойпаланып, урам буйында йөрөгән эскеселәрҙеке кеүек булып ҡалған.

- Мин бер ҡайҙа ла китмәйем. Һине алырға килдем. Ҡайттыҡ өйгә!

- Нимә? - Ҡатынҡай үҙ ҡолаҡтарына үҙе ышанманы. Шаярталыр!.. Шундай хәлдән һуң ни йөҙө менән өйөнә алып ҡайтһын ул Резеданы?

- Әйҙә-әйҙә, тиҙерәк бул, ҡайтҡың килмәйме әллә? - тип ҡабаландырҙы ҡатынын Илһам.

- Мин бармайым һинең менән. Былай ҙа туғандарың, ауылдаштарың алдында йөҙөңә ҡыҙыллыҡ килтерҙем. Сәйет мине ер аҫтында булһам да табасаҡ. Ғәфү ит, мине, Илһам... - Резеданың күҙҙәренә йәнә йәш төйөлдө. Ялбарып иренә ҡараны.

Ул арала аҫҡы ҡаттан Ынйыбикә апайҙың тауышы ишетелде:

- Йә, төшәһегеҙме-юҡмы? Күпме көтөргә була?

- Ынйыбикә апай?

- Эйе, йә-йә, кешене көттөрмәйек. - Илһам ай-вайына ҡуймай Резеданы алып төшөп китте. - Барыһын да аҙаҡ һөйләшербеҙ, аҙаҡ аңлашырбыҙ...

Ғәжәп, тауышында тамсы ла асыу, үпкәләү билдәһе һиҙелмәй. Ни булды икән? Зал эргәһенән үтеп барышлай, күҙенә батареяға ҡуша бәйләнгән Сәйет салынды. Резеда ирекһеҙҙән туҡтаны.

- Ҡурҡма, ул кәрәкле кешеләрен көтөп ултыра. Хәҙер

мигалкаларын ялтыратып артынан килеп етерҙәр.

- Шулай итеп, еттеңме башыма? - тип мығырланы Сәйет Резеданы күргәс һәм иҙәнгә лысҡылдатҡансы төкөрөп ҡуйҙы. Хәлдәрҙең айышына яҡшылып төшөнөп етмәгән Резеда уға ерәнеп тә, һинә шул кәрәк, тигәндәй, еңеүсе ҡиәфәтендә лә ҡараны. Унан, башын юғары күтәреп, уның эргәһенән тиҙерәк китергә ашыҡты. Әлеге ваҡытта уның башында бер уй ҙа юҡ ине. Шатланманы ла, борсолманы ла, икеләнмәне лә. Хәл-ваҡиғалар ағышына буйһондо. Барыһы ла яҡшы икәненә төшөнгәйне инде ул. Ә уға шунан башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Улар ҡапҡанан сығыуға милиция күренде. Ынйыбикә, уның Илһамы менән нимәлер һөйләштеләр, Резеданың үҙенән әллә нимә һоранылар - бер нәмә хәтерләмәй. Быларҙың береһе лә уға ҡағылмағандай, минрәү кеше кеүек хис итте үҙен. Эстән генә: "Мин ҡотолдом! Мин - ирекле!" - тип бышылдаһа ла, уның ысынлығына ышанып та бөтмәй ине. Бер аҙҙан яндарына ҡәйнәһе килеп басты, күрше-тирәләре йыйылып китте.

- Сәмиғулла бандит булған тиҙәр ҙә баһа!..

- Ынйыбикә, бахыр, шуны ла белмәй йәшәгән...

- Резеда килен дә, бисара, бандиттарҙа тотҡонлоҡта булған икән, шуларҙы милицияға тотторған да, үҙе ҡасып был яҡтарға килеп сыҡҡан.

- Тапмаҫтар тип өмөтләнгәндер инде, эй, Алла!..

- Сәмиғулла ла ҡалай эт икән! Ҡуйыныбыҙҙа йылан эйәләштереп ятҡанбыҙ...

- Шулай шул... Резеда килен тураһында тим, белгән кемдең ҡолағына төшөрөргә - ауылдың иң ләститселәренә!

- Етмәһә, Ынйыбикә һөйләне, тигән түгелме һуң?

- Өфөгә барған сағында Резеда киленебеҙгә үҙе ымһынып йөрөгән, ти бит ул...

- Кит инде, кит. Ынйыбикәне лә үҙ эшендә файҙаланмаҡсы булған да баһа!...

- Ярай уныһы эштең айышына тиҙ төшөнгән, Сәмиғулла ирем тип яҡлап тормаған, тотҡан да барыһын да һөйләгән дә биргән...

- Бигерәк шәп булған, бандиттарҙың бөтәһе лә үҙ өлөшөн алған, ти бит!.. Шундайыраҡ хәбәрҙәр ҡуйырҙы улар араһында. Резеда ишеткәнен ишетте, ишетмәгәне өсөн дә көймәне. Был ауыл халҡы барыһы тураһында ла ҡайҙан хәбәрҙар булып өлгөрә икән, шуға ғына аптыраны.

Сәйет ултырып киткән тәҙрәһенә тимер ҡуйылған машина ауыл осона сығып юғалғас, халыҡ яйлап таралыша башланы. Миңзифа киленәнә ғәйепле кешеләй һаҡ ҡына өндәште:

- Ҡайтайыҡ, килен...

Ҡапҡанан сыҡҡас, Резеда ҡая-тауға, ундағы зифа ҡайынға күтәрелеп ҡараны. Ана, ул ниндәй ғорур... Резеда ла... Ҡатындың битен көйҙөрөп ике бөртөк күҙ йәше тәгәрәп төштө. Шатлыҡ йәштәре ине улар...

**(Аҙағы).**

*ЗАУЫҠ*

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ**

# БУШ ТОРМАҪ БИТ ИЗГЕ УРЫН - КЕМДЕР КИЛЕР,- МӘЛЕ ЕТҺӘ, ЯРСЫҠ ҠЫНА АЙ ҘА ТУЛА...

### Башҡортлоҡ

*Их, башҡортлоҡ, сәхнәләрҙән төшкәс,*
*Һүтеп ырғытылған толомдай...*
*Рәйес Түләк.*

Заман боҙған тәбиғәтле,
Ерһеҙ генә илле башҡорт.
Үҙенә лә етмәгәнде
Башҡаларға йөрөй ташып...

Салауат һәм Урал, тиеп,
Яугирлыҡты әләм итеп,
Күңелендә тарих уйнай,
Өҫтән әмер, фарман көтөп.

Донъя тигән ҡуласала
Алыш та бар, һалыш та бар.
Ҡай заманда ҡай булмышың
Сәхнәләргә алып сығыр?

Илле, телле, рухлы башҡорт -
Ҡай тарафта киләсәгең?
Мин юҡмы ни улар менән -
Таң ҡалыуы Ер-әсәнең...

"Мин дә юҡмы ни ул теҙемдә?.."
Быны наян хөрлөк һорай.
"Һағышыма индерермен,
Йылъяҙмасы - мин", ти ҡурай.

### Ташландыҡ ауыл

*Ташландыҡ тип ҡарап тормаҫ әле,*
*Йәмле яҡҡа аҡ нур булып балҡыр.*
*"Ташландыҡ баҡса"*

Үлән йырам - сабылмаған шул быйыл да,
Бар донъяға яр һалғандай тик бер иңкеш.
Бәлки, кемдер ҡалғандыр ҙа был ауылда,
Кемдер унда йәшәргә бит әле тейеш?

Тынлыҡ ҡына хужа бында. Талғын елдә
Буш нигеҙгә башын эйгән уйсан ҡылған.
Был ауылды күрмәнем мин, белмәнем дә.
Бар ине, тип зыяраты айҙар һуҙған.

Ҡайҙа халҡы? Ҡырмағандыр афәт төшөп?
Яҡындалыр улар - башҡа донъяларҙа.
Уныһынан ялҡып китһә, һиллек көҫәп,
Быныһын ул йәйләү итер, ҡоймалар ҙа.

Шул мәлдәрҙе сабыр ғына көтә был ер.
Ҡышлау-йәйләү - ул борондан ҡалған йола.
Буш тормаҫ бит изге урын - кемдер килер,-
Мәле етһә, ярсыҡ ҡына ай ҙа тула...

Ҡайһылары ситтә сүкер ҡыйырсыҡ ай,-
Ере һымаҡ сабыр түгел әҙәм заты.
Үлән йырам. Иңкеш геүләй. Ҡәкүк һанай
Шым ғүмерен күптән тынған зыяраттың...

### Шиғри зар

*Ләйсәнгә*

Шағирлыҡтың сәйерлектәре күп -
Эҙләү-эҙләнеүҙең ул ҡоло:
Күңеленә үтһә, боҙҙай өтөп,
Ят йөрәктең һалҡын ялҡыны.

Ул дөрләргә әҙер бергә-бергә,
Йондоҙ нурынан да тоҡанып,
Тағы әллә күпме йөрәктәрҙән
Һағыштарҙың юйып шойҡанын.

Шағирлыҡтың йүнһеҙлектәре лә күп -
Тыумағанға ергә ҡол булып.
Ул күктәрҙән илһам ғына көтә,
Бол көткәндә кемдер ялбарып.

Шағирлыҡтың наянлығы, хисе...
Икһеҙ-сикһеҙ унда ыу-сирҙәр.
Шуғалырмы һирәктәргә төшә
Күктән ундай яҙмыш-тәҡдирҙәр.

Шағирлыҡтың матурлығы ла бар-
Кем теләмәҫ, уйлап ҡараһаң.
Артылғансы ғүмер ахырына
Бала күңел булып ҡалаһың...

Теләүселәр - һанһыҙ улар, ысын.
Тик хыялға һалып туҡтаһын.
Ерле ҡалып, улар бары кисен
Ала ҡулға шиғыр китабын.

Хәтер уяныуы
Иркә генә яҙ елендә
Тулҡын-тулҡын сирень,
Аҡ йылғаның тын йөҙөндә
Алсаҡ һының һинең...

Йәшлектәге саф хистәрҙе
Сәссалланғас иҫләп,
Йөрәк күптән күмгән серҙе
Хәтер аса нишләп?

Шул яҙҙар һәм шул һыу менән
Юғалғайны ул һын.
Хәҙер килеп, хәтеремә
Ҡайҙан өрҙө тынын?

Бер әйләнеш яһанымы
Мөсәл тигән ҡулса?-
Ул саҡтарҙың илһам тыны
Бөгөн йәнде ҡыҫа.

Мин бер иҫәр - дилбегәне
Хәтеренә биргән.
Аҡыл - алйот, бар бәләне
Йәшлегендә күргән.

*БЕР ХӘРЕФ ХИКМӘТЕ*

# СӨГӨЛДӨРСӨЛӘР



Силсәүит сулаҡ Саҙиҡ Сабитов сәркәтибе сатан Солтанғужин Солтанды сәпиттә саптырып, сөгөлдөрсөләрҙе Сыңғыҙға сираттағы сходҡа саҡырттырҙы. Сөгөлдөрсөләр: сибәр Сәлимә, сәсәниә Сәлихә, самагонсы Сәүиә, сәрелдәк Сәбилә, сиҡылдаҡ Сәрүәр, сибек Сәкинә, сымыры Сәмәрә сарылдай-соролдай, силсәүит соланына сыҡҡан сулаҡ Саҙиҡты сәләмләне:

- Сөгөлдөрсөләрҙең сибәр Сәлимә сменаһынан силсәүит Саҙиҡ Сәғитовичҡа сөгөлдөрҙәй сәләм!

- Сәләм, сәләм, суҡынған саботажсылар, сөгөлдөр сүбен сүпләмәй, сабышҡы саптарҙай сабыуыллайһығыҙ, сабынлығығыҙҙа салғы сарлайһығыҙ, сабакылар, самай сөгөлдөрҙөң суҡланыр сағында сүбәк сәйнәйһегеҙ...

Сәсрәүҙең сигенә сыҡҡан силсәүит сөгөлдөрсөләрҙе саҡматаштай сайралып "сабакылап"саҡтырҙы. Силсәүиттең сағыуынан сәмләнеп саяланған сибәр Сәлимә салғыйынан самауырҙай сөгөлдөр сығарып, сулаҡ Саҙиҡҡа сәпәне. Саҙиҡ сигенде, сәпәлгән сөгөлдөр силсәүит стенаһына сәрпелде.

- Сабышҡы саптарҙай сабыуыллаһаҡ та, сараһыҙҙан, сәхрәлә симешкә сиртмәйбеҙ, стакан сыртылдатмайбыҙ... - Сибәр Сәлимә самаларҙан, сиктәрҙән сығып, сарбайланы, - самай сөгөлдөрҙөң сүбе сыҡҡан саҡта, саҡматаштай селләлә сатыбыҙҙы себен-серәкәйҙән саҡтырып, сандырыбыҙҙы сейләндереп, сегәндәй сайырланып, сүкәйеп сүп сүпләйбеҙ ҙә ул, санаторийҙарға салғысылар, сварщиктар саба, сөгөлдөрсөләргә семтем сәй ҙә сыҡмай. Сабынлығыбыҙҙа салғы сарлаһаҡ ни, самай сабыр саҡ та. Сапмаһаҡ, сабынлығыбыҙҙы сатан Солтан сабышһынмы...

Сөгөлдөрсөләр сиратлап силсәүит Саҙиҡҡа сәнселде.

- Сәпсек сәсен сылатырлыҡ сәкүшкә саҡлым сәмәй ҙә сәсрәмәй силсәүиттән... - Самагонсы Сәүиә сибәр Сәлимәнең сарбайлауын сәләмләп сәүкелдәне.

- Серәкәйҙәй саға, сығырыбыҙҙан сығара, сырайыбыҙҙы сира, сволочь... - сәрелдәне Сәбилә.

- Сүбәк сәйнәп, сүп сығара, сәбәпһеҙгә сәйнәшә, сабакы.... - сиҡылданы Сәрүәр.

- Сиртһәң, суҡынсығы сантиметрлап-саҡрымлап сығырлыҡ... - сәүкелдәне сибек Сәкинә.

- Силсәүиткә саҡыртып, спектакль сәхнәләштермәһә... - соролданы сымыры Сәмәрә.

Сөгөлдөрсөләрҙең сиратлап сәкәләп-сәнстереүе силсәүит сулаҡ Саҙиҡты сығырынан-сығарһа ла, сабырлыҡ-сыҙамлығы самаһыҙлыҡтан сәрпелмәне. Сәмләнде. Сытырайһа ла, сүкмәне. Сәңкелдәшер саҡмы? Сөгөлдөр сәсеүлегендә сүптең сәсбауланған сағы. Силсәүит Саҙиҡ сәсәнлеген сағылдырып, сабыйҙай сымыры сырайын сығарып, сөгөлдөрсөләргә сәтер-сөтөр сөсөлдәне:

- Сабынлығығыҙҙы Саматты саҡыртып, сапҡыстан саптырырмын, сибәркәйҙәрем. Самай сөгөлдөр сәсеүлегендә сүптең сәсбауланған сағында сәкәләшмәйек, сәбәләнмәйек, сыйырсыҡтарым. Сәйе лә, санаторийы ла сығыр, социаль сараларға субсидия, сифатлы сепрәк-сапраҡ та стимуллаштырырбыҙ. Сентябргә саҡлы сөгөлдөрҙән суғым сығым сумырһаҡ, совхоздан - системный сепаратор, сымлы самауыр ҙа сумдырырбыҙ...

Субсидия, системный сепаратор, сымлы самауыр...

Силсәүиткә сәйер секерәйгән сөгөлдөрсөләрҙе Саҙиҡтың сәйәси стимуллаштырыу саралары сәмләндерҙе. Сөгөлдөрсөләр сөгөлдөр сәсеүлегенә сәселеп, сәғәт самаһында сүп-сарҙы, сәнскәктәрҙе сүмәлә сүрәтенә сығарҙылар.

Сәсеүлек ситендә сәскәләр серләшә, сиңерткәләр сырылдаша. Сөгөлдөрсөләр сарылдашалар. Сарсанылар сибәркәйҙәр, саңға сөскөрә-сөскөрә сәсеүлек ситенә сыҡтылар ҙа, сәсмәүерсулпыларын сыңлатып, сыр-яланғасҡаса сисенделәр ҙа, Сөнгә сумдылар.

Сибәр сөгөлдөрсөләрҙең Сөндә сума-сума сырсыулауына ситтән сулаҡ Саҙик, сатан Солтан сәпәкәйләне.

Шулай итеп...

"Субсидия, системный сепаратор, сымлы самауыр" стимуллаштырыу системаһы сөгөлдөр сәсеүлеген - сүп-сарһыҙ, сибәр сөгөлдөрсөләрҙе - сыр-сисенеүле ҡалдырҙы.

**Зилиә ИСҠУЖИНА.**
**Хәйбулла районы Йәнтеш ауылы.**

✓ Унда дөйөм 12 синыф уҡытыла. Етенсенән башлап дәрестәрҙе үҙең һайлайһың, йәғни ниндәй фәндә өйрәнергә теләйһең, көнөнә алты сәғәт шуны өйрәнәһең, улар көн һайын ҡабатлана. Уҡыу биш көн дауам итә.



ИНТЕРНЕТТАН



# АЛМА ҒҮМЕРҘЕ ОҘАЙТА,
## газлы һыу - ҡыҫҡарта

■ Төндә яҡшы йоҡлау өсөн кемгәлер һалҡын душ ҡабул итергә, кемгәлер йылы һөт эсергә кәрәк. Әммә йоҡоғоҙ туйһын, тиһәгеҙ, иң тәүҙә йоҡо бүлмәһенең температураһына иғтибар итегеҙ. Табиптар әйтеүенсә, йоҡлаған саҡта бүлмә йылылығы 15-20 градустан артмаҫҡа тейеш. Бүлмә температураһы түбән булған һайын, тән температураһы ла түбәнәйә һәм йоҡо килә башлай. Бигерәк тә хроник йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусыларға һалҡынсараҡ урында йоҡларға кәңәш итәлә.

■ Ерән сәсле кешеләр ауыртыуҙы нығыраҡ тоя. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, тап ерән сәсләләргә ауыртыуҙы баҫыусы дарыуҙарҙы гәҙәти дозанан күберәк эшләргә кәрәк. Ерән сәсләләр ауыртыуҙан ҡурҡыу сәбәпле, теш табибына ла һирәгерәк йөрөй. Был феномендың белгестәр түбәндәгеСә аңлата: меланокортин-1 тип аталған бер гендың мутацияһы һөҙөмтәһендә ерәндәр ауыртыуға нығыраҡ бирешә икән. Был ген ҡара һәм һары сәсләләрҙә меланин, ә ерән сәсләләрҙә феомеланин бүлеп сығара. Тап феомеланин тирене асығыраҡ төҫлө итә һәм сәсте ерәнгә буяй.

■ Яңы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, йәшелсәләрҙе дөрөҫ әҙерләмәү кариесҡа килтереүе ихтимал. Ғалимдар әйтеүенсә, баклажан, ташҡабаҡ һәм йәшел боросто ҡыҙҙырғанда уларҙа теш эмаленә зыян килтереүсе кислота барлыҡҡа килә. Йәшелсә кислотаһы газлы эсемлектәрҙә барлыҡҡа килгән кислотаға яҡын. Шуға ла йәшелсәләрҙе быҡтырып ашау файҙалыраҡ. Әйткәндәй, помидор һәм һуғанды нисек әҙерләһәң дә була.

■ Магнитлы уйынсыҡтар балалар сәләмәтлеге өсөн зыянлы. Бигерәк тә магнитты яңылыш йотоп ебәреү насар эҙемтәләргә килтереүен оноторға ярамай. Цинциннати дауаханаһы 128 осраҡты тикшереп, башлыса 5 йәшлек сабыйҙарҙың магнит йотоуын билдәләгән. Педиатрҙар әйтеүенсә, магнит организмға эләккәс тә бала һалҡын йәки грипп тейҙергәндәге кеүек ауырый башлай, тән тартышыуы, эс ауыртыуы күҙәтелә. Әгәр ҙә ата-әсә табипҡа һуңыраҡ мөрәжәғәт итһә, балаға дөрөҫ диагноз ҡуйылмаһа, эсәктә ауыр инфекция башлана.

■ Көн һайын алма ашаған кешеләр оҙағыраҡ йәшәй. Австралия ғалимдары ун йыл тәжрибә үткәргәндән һуң, ошондай һығымтаға килгән. Профессор Мэнни Нокс һүҙҙәре буйынса, алма составындағы полифенол ҡандағы холестеринды кәметә, диабетты булдырмай. Ул шулай уҡ астма һәм аллергияны киҫәтеүсе яҡшы сара.

■ Газлы эсемлектәрҙә фосфат кимәле юғары булыу сәбәпле, ул организмда ҡартайыу процесын тиҙләтә. Етмәһә, татлы һыу яратыусыларҙа олоғая барған һайын бөйөрҙәр, йөрәкҡан тамырҙары сирҙәре аҙа, мускул дисфункцияһы, тире атрофияһы барлыҡҡа килә. Гарвардтың стоматология мәктәбе клиницистары сәләмәт булыу өсөн организмда фосфаттың күләме артып китергә тейеш түгел, тип иҫәпләй. Ғалимдар тикшеренеүҙәрҙе ҡомаҡтарҙың өс төркөмөндә алып бара һәм был матдәнең организмға зыянын тикшерә. Һөҙөмтәлә, юғары күләмдәге фосфатлы аҙыҡ ҡулланған төркөмдә ҡомаҡтар 15 аҙна эсендә үлеп бөтә. Америка ғалимдары быны фосфаттың организмды йәйлап ағыулауы менән аңлата. Тимәк, газлы татлы эсемлектәрҙәге токсик матдә лә йәйлап организмда тупланыу һәм уға зыян килтереү һәләтенә эйә.

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ

**Мин унның атаһы менән бер мәктәптә, әсәһе менән Башҡорт дәүләт университетында бер ваҡытта уҡыным. Шуға ла һирәк-һаяҡ булһа ла осрашып тора инек. Былтыр йәйгеһен күрешкәндә улар мәж килеп ҡыҙҙарын Америкаға ебәрергә әҙерләнә ине. Бер йыл һиҙелмәй үтеп тә киткән, ошо көндәрҙә "американка" үҙе редакцияға килеп инде. Минән булмай, хәлемдән килмәй, йә иһә, байҙарҙың балалары ғына сит илдә уҡый һәм башҡа ошондайыраҡ үҙен аҡлаусы һүҙҙәр тапҡан мәктәп уҡыусыларына Фатима Мостафина исемендәге 20-се Өфө башҡорт гимназияһының 10-сы синыфы уҡыусыһы Лилиә МОСТАФИНАның тарихын бәйән итергә ине ниәтем.**

# МАҠСАТЫҢА ӨЛГӘШЕҮ ӨСӨН...
## уға ҡаршы бар!



Бәләкәй ваҡытынан ул ҡыҙыҡһыныусан, күҙәтеүсән булып үҫә. Урам буйлап йөрөргә сыҡҡанда ла берәй нәмә иғтибарын йәлеп итһә, шуның янында туҡтап, уны өйрәнеп, күҙәтеп торған була. Атаһы менән әсәһенең алғараҡ китеп, унан йәнәшәүенә лә иҫе китмәй икән - ҡыҙыҡайҙың үҙ донъяһы, үҙ мәғжизәләре. Мәктәптә уға дәрестәр еңел бирелә. Хатта инглиз теленә ручка менән блокнот ҡына тотоп йөрөй башлай. Һөҙөмтәлә сиреккә уға ошо фәндән "дүртле" сыға. Аптыраған әсә уҡытыусыһына килә: "Һеҙ уға өҫтәмә эш биреп ҡарағыҙ," - тип теләк-кәңәшен әйтә. Уҡытыусы әсә ҡушҡанса эшләй... һәм Лилиәлә инглиз теленә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна, тырышып уҡып китә. Тиҙҙән был сит тел унын иң яратҡан дәрестәренең береһенә әүерелә. "Инглиз теленән йыл һайын тигәндәй яңы уҡытыусы уҡытты, уларҙың һәр береһенең үҙ алымы, үҙ стиле", - ти хәҙер Лилиә. "Ә бит күп уҡыусылар уҡытыусы алышыныуын уҡымауының, яҡшы баһалар алмауының сәбәбе итеп күрһәтә..."- тим, һүҙ ҡыҫтырып. Йәш әңгәмәсем был фекерҙе ҡырҡа ҡырт киҫте: "Уҡыйым тиғән кешегә яңы уҡытыусы стимул ғына!" Тура һүҙгә яуап юҡ, һүҙҙе йәйлап ҡына унын сит илдә уҡып ҡайтыуы темаһына борам.

- Барлыҡ Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәһе илдәрендә 1997 йылдан алып "FLEX" тиғән программа эшләй. Уны Америка хөкүмәте үҙе финанслай. Унда теләгән бер уҡыусы ҡатнаша ала. Һайлап алыу өс турҙан тора. Беренсеһендә инглиз телен ниндәй кимәлдә белеүеңде тикшерәләр. Икенсе тур - һөйләгәндә аңлай алыу-алмауыңды асыҡлайҙар, инша яҙыу ҡаралған. Өсөнсө тур иң оҙайлыһы - әңгәмә. Уны уйын рәүешендә үткәрәләр, кешеләр менән нисек аралашыуыңды баһалайҙар, йәнә ике инша яҙырға тура килә. Өс турҙан да үтһәң, бер уҡыу йылы осорона Америкаға ебәрәләр. Һайлап алыу турҙары Өфө мәктәптәренең береһендә үтте. Унда 400 бала ҡатнашты һәм Башҡортостан буйынса 19, шул иҫәптән Өфөнән 5 бала еңеп сыҡтыҡ.

Америкаға китер алдынан барыбыҙҙы ла йыйып, йыйылыш үткәрҙеләр, барыу менән "культурный" шок булыу ихтималлығын аңлаттылар һәм унда үҙеңде нисек тоторға өйрәттеләр...

Лилиә һөйләүенсә, Америкалағы уҡытыу беҙҙәгенән нык айырыла икән. Әйтәйек, беҙҙә алты көн буйы төрлө предметтар (бер көндә төрлө фәндән тупланған биш-алты дәрес) өйрәнелә. Унда дөйөм 12 синыф уҡытыла. Башланғыс синыф алтынсы класҡа тиклем. Етенсенән башлап дәрестәрҙе үҙең һайлайһың, йәғни ниндәй фәндә өйрәнергә теләйһең, көнөнә алты сәғәт шуны өйрәнәһең, улар көн һайын ҡабатлана. Уҡыу биш көн дауам итә. Шәмбе - ял көнө. Ҡайһы бер штаттарҙа йома көндө лә ял итәләр. 9-12 синыфтар - өлкән кластар. Шуныһы бар: мотлаҡ ирекле дәрес һайларға тейешһең. Уға сит телдәрҙе өйрәнеү, фотоға төшөрөү, ҡул эштәре һәм башҡа дәрестәр инә. Лилиә компьютерҙа клавишаларға ҡарамайынса баҫырға өйрәнә һәм веб-дизайн серҙәрен үҙләштерә. Ә бына ниндәй фәнгә иғтибарын нығыраҡ бүлгән икән әңгәмәсем:

- Унда үҙемә оҡшаған дәресте - ер тураһындағы фәндә (унын ҡоролошон, климаттың, геологик процестарын) ныҡлап өйрәндем. Тәүҙәрәк Америкала уҡыу системаһы оҡшаған кеүек ине, һуңынан үҙебеҙҙәге дәрестәрҙе һағына башланым. Беҙҙә уҡыу ыҡсымлыраҡ - көн һайын дәрестәр алмашынып тора, ә унда аҙна буйы "бер балыҡ башы". Әлбиттә, һүҙ ҙә юҡ, йәшәү еңел, бөтә нәмә кеше мәнфәғәтенән сығып, уйлап эшләнгән. Мәҫәлән, бордюрҙарҙы ғына алғанда ла, беҙҙә улар бейек һәм шаҡмаҡ итеп эшләнгән, ә унда уңайлы ғына итеп юлға төшә, инвалидтар ҙа, коляскала балаларын йөрөтөүселәр ҙә, велосипедлылар ҙа ыҙаламай. Халҡы гел йылмайып йөрөй, хатта тәүгә күрһәләр ҙә "Сәләм, хәлдәрең нисек?" тип һорашалар...

Өфөлә Лилиәнең инглиз теленән тиҙ генә күнегеүҙәрен эшләп, синыфташтарына ярҙам итеүе тураһында хәбәрҙәр инем, сит илдә был гәҙәтенә ваҡыт еттеме икән? Бәхтиһәң, ул Америка уҡыусыларына ла ҡайһы бер фәндәрҙән ярҙам итергә ваҡыт та, форсат та тапҡан. Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ күрер, халыҡ күрмәһә, балыҡ күрер, тип юҡҡа әйтмәйҙәр, изгелек эшләү һәр башҡорттоң булмышында барҙыр. Юҡҡа ғына Лилиә волонтерлыҡ хәрәкәте менән ҡыҙыҡһынып, уны ойоштороу дәрте менән янып ҡайтмаған.

"Башҡортостанды брендтар - башҡорт балы, ҡымыҙ, Салауат Юлаев буйынса беләләрҙер?"- тиғән һорауыма көтөлмәгән яуап алдым. Бәхтиһәң, республикабыҙҙы ғына түгел, Рәсәйҙе яҡшылап белмәйҙәр икән унда.

Августан июнгә тиклем була Америкала Лилиә, шул ваҡытта ул бынан ун йыл элек күсенеп килгән немец Георг менән Магелона Болиндарҙың ғаиләһендә йәшәй. "Уларҙың үҙҙәренең балалары күптән таралышҡан, шуға берҙән-бер бала мин булдым, - тип көлә Лилиә. - Болиндар - волонтер, программа буйынса килгән балаларҙы үҙҙәре һайлап ала. Адаптация үткәндә лә, артабан да уларҙың ярҙамы ҙур булды. Мәҙәниәтте нык өйрәттеләр, хатта күп нәмәгә минең өсөн түләнеләр. Бирелгән стипендиямды иркенләп тотондом". Шул гәҙәтен бында ла дауам итеп ҡарай ул, ләкин тиҙ үк ысынбарлыҡҡа ҡайтырға тура килә.

Диңгеҙ аръяғындағы тормошто үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтырға йөрьәт иткән ҡыҙ Рәсәй уҡыу системаһында бер синыфҡа тиҫтерҙәренән артта ҡалды. Киңәйләп кенә ошо һорауҙы бирәм: бер йылыңды бушҡа үтте тип үкенмәйһеңме?

- Юу-у-уҡ, - тип балаларса ихласлыҡ менән һуҙа Лилиә, - хәҙер донъяның башҡа илдәренә барғым, ундағы тормошто күргем килә. Бының өсөн инглиз телен тағы ла нығыраҡ өйрәнергә һәм камиллаштырырға кәрәк.

Башланғыс синыфтарҙа уҡығанда Лилиә гелән, мин Англияға барып уҡыясаҡмын, тип хыялланған. Ошо бала саҡ хыялын иҫенә төшөргәс, ул мөләйем генә йылмайып, Алла бойорһа, унда ла барырмын, тип ҡуйҙы.

Әңгәмә һуңында йәш замандашыма уйламаған һорау бирҙем: "Төштәреңдә ниндәй телдә күрәһең?" Лилиә, әйтерһең дә, мин унын уйҙарын уҡығанмын, рәхәтләнеп көлдө: "Йоҡлағанда мин һөйләшәм икән, шуға хәҙер әсәй, һин өс телдә төш күрәһең - башҡортса, русса, инглизсә, ти", - тине.

Бөгөн Лилиә Мостафина киләсәктә үҙен физика-математика йүнәлешендәге уҡыу йорто студенты итеп күрә. Мәғлүмәт быуатында мәғлүмәт технологияларын, компьютерҙарҙы ныҡлап өйрәнеү - унын сираттағы маҡсаты. "Американдар үҙҙәренә нык ышана. Хәҙер минең дә үҙ-үҙемә ышанысым артты. Тиҫтерҙәрем дә үҙ-үҙҙәренә ышанһын ине", - ти ул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был тормошта көн үтһен, ваҡыт уҙһын, кейем туҙһын, тип йөрөүгә ҡарағанда алдыңа оло маҡсаттар ҡуйып, унын ҡасан һине килеп табыуын көтөп ултырмай, уға ҡаршы атлағанда ғына өлгәшергә мөмкин.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

# ТӘМӘКЕ ХАРАП ИТТЕ -

## һуңғы һүҙҙәрең ошо булмаһын өсөн...

**Йәнәшәбеҙҙә шундай изгелекле кешеләр бар, тик уларҙы күрә белергә генә кәрәк икән. "Күңел наҙымды һалып бәйләмдәр бәйләйем, сигәм. Һуңынан уларҙы балаларыма, ейәндәремә, башҡа яҡын кешеләремә бүләк итәм. Өйөмә ингән һәр кемде ихлас ҡаршы алам, сәй эсермәй ебәрмәйем. Кешегә бер йылы ҡарашың, бер йылы һүҙең дә ҙур сауап бит ул. Аллаһы Тәғәләгә һыйынып, доғалар әйтәм, Уның ризалығын алып йәшәргә тырышам. Әсәйем яғынан ике ҡартатайым да мулла булған, ә ҡартасәйҙәрем ауыл балаларын уҡыу-яҙыуға өйрәткән. Беҙҙең халыҡтың иманы көслө, күңеле матур. Беҙҙең халыҡта борондан кеше йәнен ҡыйыу, урлашыу кеүек алама ғәҙәттәр булмаған. Ана шул иманды юғалтмай, матур күңелебеҙҙе һаҡлап, гүзәл әхлағыбыҙҙан ситкә китмәй йәшәһәк, милләтебеҙҙе бер ниндәй сәйәсәт тә юҡҡа сығара алмаҫ, киреһенсә, көсәйербеҙ, сәскә атырбыҙ, тип ышанам". Шундай матур һүҙҙәр менән башланды редакцияға килеп ингән Заря апай Бикташева менән аралашыуыбыҙ. Апайыбыҙ беҙгә үҙенең волонтерлыҡ эшмәкәрлеге тураһында ла һөйләп алды. Уның фекерҙәре, кәңәштәре гәзит уҡыусыларға фәһемле булыр, тип, һүҙҙе уның үҙенә бирәбеҙ.**




### Алтылағы - алтмышта

Эскелек, тәмәке, наркоманлыҡ илебеҙгә ҙур афәт булып ябырылды һәм ошо ағыуҙар арҡаһында күпме кешенең ғүмере өҙөлдө, күпме кеше яфа сигә - һанап бөтөрөрлөк түгел. Миҫал өсөн бер генә һан килтерәм: Рәсәйҙә йыл һайын бер кеше 25 л спирт эсә килеп сыға. Ҡот осҡосмо? Аҡыллы кешеләрҙең ошо ағыуҙарға бирелеп, түбән тәгәрәүе, үҫмерҙәрҙең эскелек, тәмәке, наркоманлыҡ һаҙлығына батыуы йөрәгемде әрнетә. Бынан 12 йыл элек өлкәндәрҙә һәм балаларҙа ошо афәттәргә кире ҡараш булдырыу маҡсатында "Балаларҙы наркотиктарҙан ҡурсалау" хәрәкәте булдырҙым. Ошо изге маҡсат менән мәктәптәрҙә, гимназияларҙа һәм башҡа аудиторияларҙа лекциялар уҡыйым. Әйткәндәй, лекцияларҙан һуң кәмендә 70 процент тыңлаусым минең хәрәкәткә ҡушылырға теләк белдерә. Хәрәкәттә булған мәктәп уҡыусылары, студенттарҙың береһе лә эсмәй, тартмай. Насар ғәҙәттәре булғандары ла, беҙҙең менән аралаша башлағас, был яман ғәҙәттәрен ситкә ҡуя. Шулай уҡ ейән-ейәнсәрҙәрем һәм беҙҙең 9 ҡатлы йортта йәшәгән бөтә студенттар ҙа, уҡыусылар ҙа эсмәй, тартмай. Никитанан башҡалары.

Хәрәкәт ағзалары менән эскелек, наркоманлыҡ, тәмәкегә ҡаршы төрлө акциялар уҙғарабыҙ. Плакаттарыбыҙ кешеләрҙе беҙҙең хәрәкәткә йәлеп итә, ә килгән һәр береһенә беҙ ошо афәттәргә ҡаршы антиреклама ҡағыҙҙары тотторабыҙ. Шулай уҡ беҙ был ҡағыҙҙарҙы йөклө әсәләргә, балаларға, үҫмерҙәргә таратабыҙ.

### Ағыу ҡабул итеү - аҡылһыҙлыҡ билдәһе

Билдәле Америка киноактеры Вейн Макларен оҙаҡ йылдар, тәмәкенән үпкә яман шеше барлыҡҡа килгәнсе, тәмәке рекламаһында ҡеүәтле "Мальборо Мэна"-ны һүрәтләй. 51 йәшендә ул ыҙалап үлеп ҡала. Һуңғы интервьюһында: "Был тәмәке мине харап итте. Мин ғүмеремдең һуңғы айҙарын инкубаторҙа уҙғарҙым. Һәм һеҙгә, тәмәке тартмағыҙ, тип өндәшәм. Балаларға еткерегеҙ: тәмәке үлтерә, мин быға дәлил", - ти. Был үлем осраҡлымы? Уны шул ағыуға хеҙмәт иткәне өсөн яҙмыш язаланы. Башҡаларға тәмәкене лә, спиртлы эсемлекте лә һәм башҡа наркотиктарҙы ла рекламаларға һәм тәҡдим итергә ярамай - гонаһы ҙур.

Йыш ҡына подъездарға, ишек алдарына, мәктәптәргә барып, тәмәке тартыу, эскелек һәм башҡа наркоманлыҡ - аҡыл етмәү билдәһе (башҡа төрлө әйтеп тә булмай), тип әңгәмә башлайым. Психологтар ҙа минең фекеремдең дөрөҫлөгөн раҫлай. Әйтелгәндәремә, был насар мауығыуҙар үҙ-үҙеңә ҡул һалыу ҙа булып тора, тип өҫтәйем. Ҡаршы өндәшмәйҙәр, әммә араларында тәмәке мейене эшләтә, тип һанағандары табыла. Уларға никотин һәм угар газының көслө спазмалары баш мейеһе тамырының тарайыуына һәм ҡан әҙәйеүенә килтерә, бының мейе эшмәкәрлеген тотҡарландыра икәнлеге билдәле түгел. Тәмәке тартҡанда аҡыл һәләте артыуы тураһында һүҙ ҙә булыуы мөмкин түгел!

Һыуыҡта балалар: "Йылыныр өсөн эсәбеҙ", - тип аҡлана. Мин уларға, алкоголь ҡан тамырҙарын бер аҙға киңәйтә - кеше йылынған кеүек була, әммә шунда уҡ тамырҙар тарая һәм кеше ҡабаттан өшөй башлай, тип аңлатам. Бына ни өсөн күп эскеселәр хатта май һәм сентябрь айҙарында ла туңып үлә. Өҫтәүенә, һыуыҡ ҡанды ойоштора, ә барлыҡҡа килгән тромбалар инсульт (паралич) һәм йөрәк инфарктын тыуҙыра. Һыуыҡта йүгерһәгеҙ, һикерһәгеҙ, тиҙерәк йылынырһығыҙ, тим.

"Ташларға ла йыйынмайым, бер тапҡыр ғына йәшәйбеҙ!"- тип ҡаршы өндәшеүселәр бар. Һәр әңгәмәсемдән мин: "Һыраның, шараптың беренсе йотомо оҡшанымы, тәмәке төтөнөн тәүге тапҡыр һурғанда татлы булдымы?" - тип һорайым. Бер кемгә лә оҡшамаған булып сыға. Ағыуға нәҡ беренсе реакция хаҡ. Артабан организмға тәмәкенең, алкоголдең тәьҫире көсәйә һәм кеше алдатҡыс ҡәнәғәтлек ала башлай. Ләкин был организмға бер ниндәй ҙә файҙа килтермәй. Был ләззәттән һуң депрессия башлана, ә организмға файҙалы ризыҡтарҙан һуң бер ҡасан да депрессия булмай. Һеҙ үҙегеҙҙе даими рәүештә ағыулап, рәхәтлек алаһығыҙ, шулай яйлап үлем сәғәтен яҡынайтаһығыҙ. Ә бит шул уҡ ваҡытта тормошта ғүмерҙе оҙайтыусы күпме файҙалы нәмәләр бар! Уйланығыҙ: ағыу биргән рәхәтлек яратҡан кешегеҙҙең йылмайыуынан ҡиммәтерәкме ни? Киләсәктә сабыйҙар көлөүен ишетеүҙән, үҙеңдең ейәнеңдең туйында йөрөүҙән ҡәҙерлерәкме? Ошондай сығыштарымдан һуң барыбер ҙә уйлана йәштәр ҙә, ололар ҙа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тормошобоҙҙа нығлап тамырланған афәттәргә ҡаршы бер ни ҙә эшләмәүгә ҡарағанда, бына шулай Заря апай Бикташева кеүек ниндәйҙер эш алып барыу насар түгел, тип уйланыла. Иң мөһиме - битараф булмаҫҡа, кәңәшеңде бирә йөрөргә кәрәк. Һаңғырау булмағандар ишетә барыбер. Заря апай Бикташева балалар, йәштәр алдында сығыш яһап ҡына ҡалмай, ә үҙенең һығымталарын, кәңәштәрен китап итеп баҫтырып та тарата. Шәхси сайтын булдырып, интернет селтәрҙәре аша кешеләргә файҙалы кәңәштәрен бирә, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр еткерә, фәһемле мәҡәләләр яҙа.**

**Мәҡәлә баҫырға әҙерләнгәндә Заря апайҙан интернет-хат алдыҡ. Өфөлә ағастар кибеп, япраҡтарын ҡоя башлауы тураһында яҙғайны ул. "Балаларҙы ҡурсалау" хәрәкәтендәге балалар һынап сыҡты: Һупайлы биҫтәһендә 108 ағас һәм 47 ҡыуаҡ ҡороған. Әле йорттарҙың тик төньяғында үҫкән йәшеллек кенә тере. Кешеләр, йорттарығыҙ эргәһендә үҫкән ағастарға һыу сығарып ҡойоғоҙ" - тиелгәйне хатта. Йәнәшәбеҙҙә йәшәй бына шундай битараф булмаған кеше. Һеҙҙең йәнәшәгеҙҙә бармы ундайҙар, беҙгә хәбәр итегеҙ!**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Эшҡыуарлыҡта - изгелек

**Беҙ, изгелек йоғошло, тинек. Шулай уҡ яуызлыҡ та йоғошлоларҙан һанала. Беҙгә һайлау хоҡуғы бирелгән. Эшҡыуарлыҡ бындай һайлау өсөн бигүк уңышлы булмаған өлкәлер. Сөнки изгелек юлы яуызлыҡҡа ҡарағанда файҙаһыҙыраҡ кеүек күренә. Һәр хәлдә, һүҙ тиҙ күрелгән файҙа тураһында барһа.**

Мәҫәлән, һеҙҙең кинотеатрығыҙға кеше йөрөмәй. Килемегеҙ кәмей. Хаҡтарҙы арттырырға кәрәк, тиһегеҙ һеҙ, сөнки тап ошо юл һеҙгә хәл-тороштан сығыу юлы булып күренә. Һеҙ хаҡтарҙы арттыраһығыҙ. Килемегеҙ арта, ләкин һеҙҙең фильмдарығыҙға барыбер ҡайһы бер кешеләр йөрөмәй. Улар өйҙә генә ултырып телевизор ҡарауҙы хуп күрә. Килемегеҙ тағы кәмей. Икенсе тапҡыр һеҙ икенсе төрлө, яҡшыраҡ юл табырһығыҙ, тип әйтеп буламы? Ай-һай...

Йәки һеҙ аҙыҡ-түлек етештерәһегеҙ. Сифаты насарыраҡ продукция сығарыу осһоҙораҡ, әммә һеҙ күберәк килем ала алаһығыҙ. Шуға ла һеҙ сифатты төшөрөп, килемегеҙҙе күтәрәһегеҙ. Башта һатып алыусы айырма күрмәй, ләкин бер аҙҙан ул юл ашаһындағы икенсе, продукцияның сифаты яҡшыраҡ булған магазинға йөрөй башлай. Йыл һуңында һатыу күләме кәмеү сәбәпле, һеҙ килемһеҙ ҡалаһығыҙ, ә теге магазин хужаһы шатлыҡтан балҡый.

АҠШ-тың эш биреүселәре һәр саҡ эшселәр менән конфронтацияла тора. Быларына ла, тегеләренә лә бәлештең ҙур, майлы киҫәге кәрәк. Һөҙөмтәлә ҡулланыусы тауарҙар һәм хеҙмәттәр өсөн артығыраҡ түләй, инфляция быуып бара, һәм бынан бер кем дә файҙа күрмәй, бары тик юғалта ғына.

Әгәр эш биреүсе менән эшсе "Кем хаҡлы?" тип түгел, ә "Нимә дөрөҫ?", йәғни был тормошта йәшәү өсөн нимә яҡшыраҡ, тигән принцип менән йәшәһә, нимә булыр ине?

Шулай итеп, беҙ яйлап ҡына ниндәйҙер һығымтаға киләбеҙ. Уйланығыҙ. Тормошоғоҙҙо яҡшыртыу өсөн барлыҡ мөмкинлектәрҙе лә ғәмәлгә ашырҙығыҙмы? Әлбиттә, юҡ. Тимәк, төҙөү, ижад итеү тамамланмаған әле. Моғайын, шуның өсөн дә Ижадсы, Булдырыусы беҙҙе ошо ергә ебәргәндер - беҙ төҙөлөштө тамамларға тейеш.

* * *

Үҙендә кире уйҙар йөрөткән һәр кем ижад итмәй, ә емерә.

Беҙ, әлбиттә, тиҙәк тулы һарайҙан киткеһе килмәгән һәм "Ни өсөн?" тигән һорауға:"Бында тиҙәк шул тиклем күп, тимәк, ҡайҙалыр пони булырға тейеш", - тип яуаплаған малайға оҡшай алмайбыҙ.

Шулай ҙа ыңғай уйҙар уйлау ауыр түгел. Ыңғай уйлы һәр кем төҙөүгә ярҙам итә. Ул Ижадсының арҡаҙашына әйләнә. Был донъяны яҡшыраҡ итергә тырышығыҙ, һәм һеҙ ундағы байлыҡтың бер өлөшөнә эйә булырһығыҙ. Һеҙ үҙегеҙ теләгән нәмәләрҙе һатып алырлыҡ аҡса булдырырға ғына түгел, ә уңыш өсөн кәрәк булғандың барыһына ла - дуҫлыҡҡа, мөхәббәткә, тыныслыҡҡа һәм үҙ-үҙең менән ҡәнәғәтлеккә өлгәшергә теләйһегеҙ.

Ыңғай уйҙар уйлаһағыҙ, эштәрегеҙ ошо уйҙарҙың дауамына әүерелә. Ярҙам итергә, яңы нимәлер эшләргә, яратырға, бирергә әҙер булмай тороп, үҙенде ышаныслы, эшлекле, ихтирамлы итеп тойорға ярамай.

**Роберт СТОУН.**



## 9 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Раньше всех"
09.50 "Малахов+"
11.00 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Танго с ангелом", 59-я серия. Драма
22.30 "Химик", 1-я серия. Детектив
23.30 "Дневник Бриджит Джонс"
01.20, 03.05 "Золото Маккены"
03.00 Новости
03.50 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Неоконченная песня. Юрий Гуляев"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.35 "Вести-Башкортостан"
11.55 "Богатая и любимая"
